*✓ Һеҙ еңергә теләйһегеҙ, әммә еңеүегеҙгә ышанмайһығыҙ - тимәк, ысынлап та еңә алмаясаҡһығыҙ. Сөнки еңеүҙәр ҙә, уңыштар ҙа кешенең теләгенән, ынтылышынан, үҙ-үҙенә ышанысынан тора. Кәрәштә иң көслөләр түгел, ә "Мин булдырам!" тип уйлағандар еңә.*

**Билл НЬЮМЕН.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№23 (441)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡар башына ҡар етә...**



3

**Тамырҙарын белгәндең...**

рух көсө арта



7

**Тел бәсе,**

йәки Һыйырҙы эйәрләйҙәрме, кәзәне йүгәнләйҙәрме?



8

**Кеше ниңә күккә ынтыла?**




9

14 **ТВ-программа**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# Ни өсөн урман кәҙере китте, ниңә уның янғынына юл ҡуйыла?

***Ноғман МУСИН, халыҡ яҙыусыһы, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты:*** Урмандарыбыҙ яҙмышы - ул әле бөгөн генә килеп тыуған мәсьәлә түгел, ул - һөҙөмтә, тип әйтергә кәрәк, сөнки урман ҡәҙерен күптән ебәрә башлағайныҡ инде. 2000 йылдарҙан алып, ниһайәт, ул бөтөнләй хужаһыҙ ҡалдырылып ҡуйҙы, сөнки урмандарҙа эшләгән урман хужалыҡтары, лесничестволар йә бөтөрөлдө, йә эреләтеү һылтауы менән берләштерелде. Шулай итеп, урман хужаһыҙ тороп ҡалды, ә унда эшләп йөрөгән, үҙен урманды һаҡлаусы, яҡлаусы итеп тойған лесник, техник, мастерҙар таралышып бөттө. Бының эҙемтәһе булараҡ, урман эше менән булған ауылдарҙа мәктәптәр, магазиндар ябылды. Еңелдән булмаған урман һөнәре эйәләренең эш хаҡы бик түбән булыу сәбәпле, унда эшләргә атлығып торосылар былай ҙа күп түгел ине. Урманда бит уны эскерһеҙ яратҡан, үҙен унан башҡа күҙаллай ҙа алмаған кешеләр эшләй. Шуныһы ҡыуанысл: республикабыҙҙа Урман хужалығы министрлығы ҡайтанан тергеҙелеп, министр вазифаһына урман төпкөлөндә тыуып үҫеп, урман эшендә эшләп, уҡып, махсус урмансы белеме алған төплө егетебеҙ - яҡташым Рәжәп Нәбиуллин тәғәйенләнде. Ләкин эш бының менән генә бөтмәй, урмандарыбыҙҙы һаҡлау, тергеҙеү өсөн лайыҡлы финанслау ҙа булырға тейеш, шул хәлдә генә ниндәйҙер аныҡ ғәмәлдәргә иҫәп тотоу мөмкин буласаҡ. Урмансы кадрҙар етешмәй. Әйтеүҙәренсә, әҙерҙе емереүе генә тиҙ, ә яңынан тергеҙеү ваҡыт та, байтаҡ сығымдар ҙа талап итә шул.

Урманды ситтән килеүселәргә арендаға биреү мәсьәләһенә килгәндә, был процесс борон да булған, әлбиттә, тик халыҡ быны үҙ ағышына ҡалдырып ҡуймаған, ә ныҡлы контролдә тотҡан. Әгәр арендасы берәй ярамаған эш менән булһа, урманға һаҡсыл мөнәсәбәт күрһәтмәһә, халыҡ, килешеүҙе юҡҡа сығарып, дилбегәне үҙ ҡулына алған. Ә бөгөн, киреһенсә, арендасы фәҡәт урманды үҙ мәнфәғәтенә файҙаланыу, ағасын ҡырҡып ситкә оҙатыу менән генә мәшғүл, ә диләнкәне таҙартыу, унда ағас ултыртыу тигән нәмә юҡ. Һуңғы ваҡыт янғындар ҙур афәткә әүерелде. Бөтә Рәсәй буйынса бик күп урман янып харап була. Шул әлеге тәбиғи хазиналарыбыҙға тейешле мөнәсәбәт, һаҡсыллыҡ булмауҙан, тип аңларға кәрәк быны. Урмансылар халыҡ араһында аңлатыу һәм иҫкәртеү эштәре алып барырға тейешле. Беҙҙә халыҡтың тәбиғәткә мөнәсәбәте бик түбән кимәлдә. Мәҫәлән, Германияла булғаным, унда урмандарҙың парк кеүек таҙа, бөхтә булыуына иҫем китеп һоҡланғаным бар. Урмандарында бер ҡоро сыбыҡ та күрмәҫһең. Ә беҙ мәңгелек байлығыбыҙҙы тапап, яндырып, тәләфләп йәшәйбеҙ. Тәбиғәт үҙенә ҡарата бындай ҡоротҡослоҡто бер ҡасан да ғәфү итмәй...

***Гоги НАДЕРЕЙШВИЛИ, "Лесная газета"ның баш мөхәррире:*** Рәсәй урмандарындағы янғындар буйынса ил Президенты үткәргән кәңәшмәлә мине иң аптыратҡаны шул булды: урмандарыбыҙ киләсәге хаҡындағы был һөйләшеүҙә бер генә урман белгесе лә булманы. Рәсәй Хөкүмәтендә урман мәсьәләләренә шулай уҡ был өлкәнән алыҫ торған кеше - Виктор Зубков етәкселек итә, Рослесхоз етәксеһе В. Масляков та һөнәре буйынса урмансы түгел, ғүмерҙә лә был өлкәлә эшләп ҡарамаған чиновник. Ғөмүмән, 2002 йылда илдә үҙ аллы урман хеҙмәте бөтөрөлгәс, урман мәсьәләләре буйынса төп вазифаны кемдәр генә биләмәне. Улар араһында әлегесә тик урмансы ғына булманы. Урман өсөн дә яуап биреүсе тәбиғи ресурстар министры Яцкевич геолог ине, Артюхов - юлсы, Трутнев - нефтсе, ә урман ведомствоһын электрик Рощупкин, йә ауыл хужалығы белгесе Савинов етәкләне, әле тағы ла шул уҡ аграрий Масляков. Әйтеүемсә, икһеҙ-сикһеҙ урмандары булған илебеҙ Хөкүмәте составында урмансылыҡ буйынса белеме һәм эш тәжрибәһе булған бер генә кеше лә юҡ. Был, әлбиттә, беҙҙең урмандарға булған мөнәсәбәт тураһында һөйләй. Әлбиттә, урмандағы янғындар менән көрәш өсөн миллиардлаған һум аҡса бүленә, ләкин ошо уҡ аҡсаны янғындар сыҡмаҫ элек урманды ҡараусы, һаҡлаусы кадрҙар әҙерләүгә сарыф итергә була ине бит. Иң беренсе сиратта бөгөн урманды һаҡлау эшен аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Ә бының өсөн аҡса ғына түгел, ваҡыт та кәрәк, сөнки тиҫтәләрсә йыл емерелгәнде бер йылда ғына тергеҙеү мөмкин түгел. Бының менән мин шуны әйтергә теләйем: янғынды һүндерер, тип тәбиғәттән ямғыр һорап ялбармағыҙ, ул барыбер ярҙам итмәҫ. Урман һаҡсыларына ялбарайыҡ - бөтә өмөт уларҙа.

***Әләм ШӘРИПОВ, биология фәндәре кандидаты, Бөрйән районы:*** Ҡайҙалыр ситтә, тайга яҡтарында булған янғындың осҡоно беҙгә лә килеп етте. Былтыр йәй Башҡортостанда бер-нисә урында урман янды. Ут беҙҙең Бөрйән ҡурсаулығы янындағы урманға ла таралып китте. Янғын һүндереүгә урындағы халыҡ дәррәү сыҡты. Дәүләт тарафынан аҡсалата ярҙам күрһәтелде. Был аҡсаға яңы трактор, янғын һүндереү техникаһы, ҡорамал һатып алынды. Ошонан һуң һәр бер ауылда 6-7 кешенән торған янғын һүндереү төркөмдәре төҙөлөп, уның етәкселәре билдәләнде. Улар кеҫә телефондары менән тәьмин ителде. Кәрәк була ҡалһа, янғын һүндереүселәрҙе тиҙ генә табып алып була хәҙер.

Урмандарҙы янғындарҙан һаҡлау һәм, ғөмүмән, уларға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт булдырыу саралары бар, әлбиттә. Бының юлы, минеңсә, элеккегә кире ҡайтыуҙа, йәғни лесник, уның ярҙамсылары, техниктар һәм мастер вазифаларын булдырыу һәм улар алдына аныҡ бурыстар ҡуйып, уның үтәлешен талап итеү. Бөгөнгө реформаларҙан һуңғы хужаһыҙлыҡты, урман хужалығын туҙҙырыуҙарҙы тәртипкә һалып алыуы, ай-һай, күп көс һәм сығымдар талап итәсәк. Әйтеүемсә, лесничестволар бөтөрөлгәс, урман эшселәре эш эҙләп ҡайһылары - Себергә, икенселәре ҡалаларға сығып китеп бөттө. Бөтә йөрәген биреп, үҙ урманын һаҡлаған кешеләребеҙҙе юҡҡа сығарҙыҡ.

Урмандарыбыҙҙы ҡуртымға биреү мәсьәләһе лә бик борсой халыҡты. Уны 49 йылға ҡуртымға биреү - ул төптө мәғәнәһеҙлек. Бирһендәр тәүҙә 2-3 йыл срокҡа, аҙаҡ күҙ күрер. Урман борон-борондан халыҡтың уртаҡ байлығы булған, хәҙер иһә халыҡтан һорап та тормай, килә лә хужа булалар. Ил байлығы фәҡәт илгә хеҙмәт итергә тейеш - минең фекерем шул.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**



✓ "Алмабикә - II" фильмында йәш уҡытыусы ауыл халҡын тап-таҙа итеп башҡортса һөйләшергә өйрәтә һәм шуның һөҙөмтәһендә фильм тап-таҙа башҡорт телендә барасаҡ икән.



ЯҘМЫШ - ЯҢЫЛЫШ

# БӘЛКИ, ҺӨЙӨҮҘЕ...

## шуҡлыҡ тип ҡабул иткәнмендер

**Күптәрҙең шундай баҫалҡы, йомоҡ булып ҡалыуын һиҙәһегеҙҙер. Улар бәләкәй генә өңдәренә инеп боҫҡандар һымаҡ тойола миңә. Әллә совет осоронда өйрәнелгәнсә: "Одобрям!" дауам итәме? Хатта гәзитебеҙ иғлан иткән ҡыҙыҡ рубрикаларға ла үҙ фекерен яҙыусылар бик һирәк булыуы аптырата мине.**

Гәзитебеҙҙең 17-се һанындағы "Яҙмыш - яңылыш" рубрикаһы миңә бик ҡыҙыҡлы тойолдо. Ул рубриканы күтәреп алырҙар ул, тормошта һәр кемдең үкенесле хаталары була, тип уйлағайным. Тик бер кем дә үҙ иҫтәлектәре менән уртаҡлашманы әле. Шунан үҙем бер ваҡиға тураһында яҙырға булдым.

Беҙҙең синыф 5-се һанлы балалар йортонан интернатҡа йөрөп уҡыны. 10 синыфҡа еткәс, беҙҙе бүлгеләнеләр, йәғни интернаттағы һәр 4 синыфҡа 5-шәр баланы таратып ҡуштылар. Шаян, тиктормаҫ, шау-шыулы, һуғышсанлығыбыҙ арҡаһында шулай иттеләр. Күҙгә күренеп айырылып тормаһындар, тигәндәрҙер. Беҙ, Ғилминур, Морат, Земфир, мин, Факиһа 10-сы "б" синыфына эләктек. Беҙ, ҡыҙҙар, ауыл малайҙарына әйләнеп тә ҡарамайбыҙ. Улар бармы ни ҙә, юҡмы ни беҙгә. Ә шулай ҙа синыфыбыҙҙағы һәр саҡ этелеп-төртөлөп йөрөгән, бәләкәй генә буйлы Мәжитов атлы малай күҙгә салынып-салынып ҡуя. Сөнки уның ҡыҙыҡ ҡына ҡушаматы бар: "Пи-пи" тип өндәшәләр уға. Мәжитов аҡ ҡына түңәрәк йөҙлө, оҙон, ҡуйы керпектәре артында зәп-зәңгәр ҙур күҙҙәре балҡып торғандай. Ҡаштары ҡыйылып киткән, ҡап-ҡара сәстәре тулҡынланып ҡабарып тора. Хас ҡыҙ бала тиерһең. Ирендәре үпкәләгән кешенеке кеүек бүртеп тора. Шуға ла "бәпәй" һүҙен үҙгәртеп "Пи-пи" тип ҡушамат таҡҡандар икән. Был ҡушамат ҡыҙыҡ булғанға ла иғтибар иткәнмендер был малайға. Етмәһә, минең алдағы иң беренсе партала Фәриҙә менән ултыра ул.

Бер кис интенатта дәрестәр әҙерләгәндә: "Мәжитов, һинең циркулең бармы, биреп торһаңсы миңә?" - тип өндәштем. Башҡаларға ҡушылып, уны мин бер ҡасан да ҡушаматы менән атамайым. Мәжитов боролоп ҡараны ла: "Бар, килеп ал",- тине. "Артыңа боролоп ҡына бир инде", тигәйнем, ул: "Килеп ал!" - тип ныҡышты. Ярай, күңеле булһын инде, эргәһенә барып алайым, тип урынымдан тороп, Мәжитовтың ҡаршыһына барып баҫтым да: "Ҡайҙа циркулең?" - тип һораным. Ниңәлер синыфтағыларҙың бөтәһе лә шып-шым булып ҡалды. Ә Мәжитов башын күтәрмәй, миңә ҡарамай ғына: "Һинең өсөн бер нәмә лә йәл түгел. Тик һин генә..."- тип тағы ла нимәлер әйтергә йыйынғайны, ҡапыл уның мине бөтә синыф алдына сығарып баҫтырып, үҙенең хистәрен аңлатырға маташыуын аңлап ҡалдым. Күтәрелеп ҡараһам, бөтә йылтыр күҙҙәр беҙгә төбәлгән. Шунан үҙем дә һиҙмәҫтән: "Пи-пи", һин әллә тилеме?"- тип әйтеп, бүлмәнән йүгереп сығып киттем. Коридорҙа һабаҡташтарымдың гөр килеп көлөүен ишеттем... Бүлмәбеҙҙә тауыштар тынғанын бер аҙ көттөм дә, бер ни ҙә булмағандай ҡиәфәт менән класҡа инеп урыныма ултырҙым. Шулай итеп, баҫалҡы тип һанап йөрөгән малайҙың мине, бөтә синыфты аптыраткан шуҡлығы ғүмергә иҫтә ҡалды...

Ә кемдеңдер яҙмышмы, яңылышмы икәнен аңлар өсөн оҙаҡ йәшәргә кәрәктер. Яратҡан кешеңдең матур ғаилә ҡороп йәшәүен күреп, үҙеңдең уға лайыҡ була алырыңа шикләнеп тынысланаһың. Ул ғаиләнең бәхетен күреп шатланаһың да хатта...

**Айгөл АХУНОВА.**

ЙӘҮКӘ ТЕЛЕФОН




# ҠОЛАҠТАН - ҠОЛАҠҠА

**Быға тиклем "Йүкә телефон" булып йөрөгән рубрикабыҙҙың "Йәүкә телефон"ға үҙгәреп китеүенә иғтибар иткәнһегеҙҙер. Был төҙәтеүҙе күренекле шағир, прозаик Мәүлит Ямалетдин индерҙе. Төптән уйлап ҡараһаң, уның менән килешмәйенсә мөмкин түгел. Ысынлап та, халыҡ араһында ысын булмаған йәки нигеҙле булып та ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа әйтелеп, шаштырылған, ҡабартылған һәм мәғәнәһе икенсе төҫ алған имеш-мимеш һүҙ йә хәбәр йөрөтөүҙе йәүкәләү тип атайҙар. Ҡасан һәм ҡайҙа башланғандыр, "йәүкәләү" "йүкә телефон"ға әүерелгән дә киткән. Кем белә, бәлки, быға "йүкә шына ҡатыу" тигән һүҙбәйләнеш тә булышлыҡ иткәндер. Һәр хәлдә, Мәүлит Ямалетдиндың рубрикаға, ғөмүмән, "йүкә телефон" терминына индергән төҙәтмәһе бик урынлы һәм бәхәскә урын ҡалдырмай. Шуға күрә беҙ ҙә "йүкә телефон " рубрикаһын "йәүкә телефон"ға үҙгәрттек. Тышҡы яҡтан үҙгәртеү әллә ни ҙур ҙа түгел, бары тик бер "ә" хәрефе генә өҫтәлә. Рубриканың латинса "Yoka press" яҙылышы шул килеш ҡала. Ә һеҙгә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, был үҙгәреш менән ҙур мөмкинлек асыла. Йәғни ауылығыҙҙа йә ҡалағыҙҙа ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа, ауыҙҙан-ауыҙға күсеп йөрөп, халыҡ ижады өлгөһөнә әүерелгән йәүкәләү һүҙҙәрен дә был рубрикаға яҙып ебәрә алаһығыҙ.**

**МӘСКӘҮ.** Илебеҙ баш ҡалаһының "Йәүкә телефон" агентлығы журналистары сираттан тыш ашығыс кәңәшмәгә йыйылып, "Илебеҙҙә "милиция" терминының "полиция"ға үҙгәртелеүе арҡаһында жаргон рәүешендә йөрөгән "мент" һүҙе урынына ниндәй яңы термин ҡулланырға?" тигән мәсьәләне ҡараған. Улар бик оҙаҡ баш ватҡандан һуң "понт" тигән терминда туҡталырға булған. Был жаргон һүҙе яңы "полиция" терминына оҡшатылып һәм тәртип һаҡсыларының граждандарҙы "понтҡа алып" алдырғатыуы нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Киң билдәле "Мент һуғыштары" сериалын төшөрөүселәр сериалдың яңы версияһын "Понт һуғыштары" тип үҙгәрткән, тигән имеш-мимештәр ҙә ишетелә Мәскәү урамдарында.

**ӨФӨ.** Өфө урамдарында машиналарҙең күплеге һәм шул арҡала барлыҡҡа килгән тығындар баш ҡалабыҙ йәмәғәтселеген борсомай ҡалмай, әлбиттә. Саралар күрелә, урамдар киңәйтелә, яңы юл үткәргестәре төҙөлә, әммә машиналарҙың һаны артыуы юлдар киңәйеүе эквивалентынан юғары булғанға күрә, тығындар кәмемәй тиерлек. Ошо сәбәпле күп кенә йәмәғәтселек ойошмалары һәм айырым граждандар был хәлдән ҡотолоу өсөн үҙ тәҡдимдәрен индерә. Мәҫәлән, билдәле шағир, драматург һәм тәржемәсе, атҡаҙанған тел болғауыры (блогер) Айҙар Хөсәйенов тығынлы Өфө урамдарын ҡаланың ситенә күсерергә, йәғни Өфө менән Стәрлетамаҡ ҡалаларын тоташтырыуҙы тәҡдим итә. Күҙ алдына килтерегеҙ: Өфө-Стәрлетамаҡ тракты тотош бер проспектты тәшкил итә. Әммә баш ҡалабыҙҙың Шакшала йәшәүсе граждандары Айҙарҙың был тәҡдименә ҡырҡа ҡаршы сыҡҡан. Сөнки, әйтәйек, Стәрлетамаҡтың "Сода" йә "Каучук" берекмәләренә Шакшанан эшкә йөрөү өсөн генә көн һайын 6 сәғәт ваҡыт талап ителеп, ундай эшсенең эш көнө 2 сәғәтте генә тәшкил итәсәк. Ҡыҫҡаһы, Хөсәйеновтың был тәҡдиме ҡабул ителмәне. Әммә Айҙар бирешергә теләмәй: "Баш ҡалабыҙҙа кешеләрҙең һәм машиналарҙың артыуы алдағы 5-10 йылда үҙенән-үҙе был ҡалаларҙы тоташтырасаҡ, бына күрерһегеҙ", - тип белдергән.

**ӘБЙӘЛИЛ.** Ошо районды́ң Байым ауылында урынлашҡан "Күбәләк продакшн" киностудияһы төшөргән "Алмабикә" нәфис фильмы тиҙ арала киң билдәлелек яулауын күҙ уңында тотоп, киностудия коллективы фильмдың артабанғы серияһын төшөрөргә йөрөй, тигән хәбәр еткерҙе беҙгә райондың "Йәүкә телефон" агентлығы журналистары. Тәүге фильмдан айырмалы (унда телдәр бутҡаһы күҙәтелгәйне) "Алмабикә -II" фильмында йәш уҡытыусы ауыл халҡын тап-таҙа итеп башҡортса һөйләшергә өйрәтә һәм шуның һөҙөмтәһендә фильм тап-таҙа башҡорт телендә барасаҡ икән.

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

КЕМ АЛЫҠ!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 10 “Ҡөрьән -Кәрим” китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **210 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум.**

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн хаҡтар түбәндәгесә: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Сәғүд Ғәрәбстаны Короллегенең Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты шәйех Сәлих Абдулла Камель менән осрашты. Шәйех Камель белдереүенсә, улар республикала инвестиция мөхитен өйрәнеү өсөн нанотехнологиялар өлкәһендә тикшеренеүҙәр үткәреүсе компания булдырырға ниәтләй. Улар был проект өсөн 5 млн доллар һалырға әҙер. Уларҙың шарты - республикала был проектҡа 5 млн доллар һалырға тейеш. Ғәрәптәр белгестәр ебәрәсәк, республиканың барлыҡ инвестиция проекттарын өйрәнәсәк һәм тәҡдим ителгән материалдарҙы анализлаясаҡ.

✓ Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылының эмблемаһы раҫланды. Конкурста 60-тан ашыу рәссам ҡатнашты. Махсус комиссия тарафынан "Башҡортостан" гәзитенең биҙәлеш мөхәррире Нәсих Хәлисовтың эмблемаһы иң яҡшыһы тип танылды.

✓ Өфөлә Рәсәй ТВ-ның 1-се каналы журналистары, алып барыусылары һәм Мәскәү артистары ҡатнашлығында "Беренсе бул!" тигән акция үткәрелде. Программа бик бай һәм йөкмәткеле итеп ойошторолғайны. Конгресс-холда үткән акцияны асыу тантанаһында БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән 1-се каналдың билдәле алып барыусыһы Леонид Якубович ҡунаҡтарҙы һәм байрамды ойоштороусыларҙы сәләмләне. Ошонда уҡ Өфөнән 14 бала тәрбиәләгән Жуктар ғаиләһенә һәм Өфөнөң Сабыйҙар йортона "Газель" автомашинаһы асҡысы тапшырылды. "Лада-Калина" автомобилдәре иһә уҡытыусы Гөлназ Мөхәмәтйәнова, педиатр Пелагея Чаплякова өлөшөнә тейҙе.

✓ 1-се канал хеҙмәткәрҙәре Республика балалар клиник дауаханаһында булды. Бындағы тантанала дауахананың иң яҡшы табиптары бүләкләнде. Ә дауахананың үҙенә яңы ламинар палата асыу һәм реанимация бүлексәһенә үҙенсәлекле ретиналь камера һатып алыу өсөн сертификат тапшырылды. Ретиналь камера әлегә республиканың бер дауаханаһында ла юҡ.

✓ Мәскәү ҡунаҡтары Өфөнөң "Ҡариҙел" биҫтәһендәге 53-сө балалар баҡсаһы асылыу тантанаһында ла ҡатнашты. Республика программаһы буйынса төҙөлгән, 80 урынға иҫәпләнгән тәүге учреждениены асыу БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән Леонид Якубович өлөшөнә тейҙе. Ҡунаҡтар тарафынан балалар баҡсаһына сенсор бүлмә, интерактив таҡта, һыуыткыс, кондиционер һәм уйынсыҡтар бүләк ителде.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҠАР БАШЫНА ҠАР ЕТӘ...



**Әлбиттә, был әйтемдең тәбиғәт күренешенә, атап әйткәндә, ҡарға бәйле аңлатмаһы ла бар. "Шынаны шына менән һуғып сығаралар" тигән әйтемде лә уның бер варианты тип әйтергә була. Ике осраҡта ла килтерелгән тәүге тура мәғәнәне биреүсе "ҡар", "шына" һүҙҙәренә бәйле фекерҙәр әйтемдәрҙе үтә ябайлаштырып күрһәтер ине. Беҙ тәрәнгәрәк төшөп фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Алағарай-апрелдә тауҙарҙың көнтөшмәҫ битләүүҙәктәрендә, йылға ярҙарында, ҡалын урмандар эсендә, ҡала газондарында һәм тротуарҙарҙа өҫтө боҙҙай ҡатҡылға әүеререлгән ҡар өйөмдәре ятыусан. Уларҙы ләйсән ямғыры ла, ҡояш нуры ла, йылы елдәр ҙә иретә алмай. Ҡайһы ваҡыт өҫтө шекәрә менән ҡапланған бындай ҡар өйкөмсөктәре йәй уртаһына тиклем дә ятып ҡуя. Бына шул ҡатҡан ҡар өҫтөнә яҙҙың елбеҙәк ҡары яуып ятыуы була, өҫкә ятҡан ыуыҙ ҡар иреп, тиҙ арала ҡатҡыл ҡар ҡатламын да һыуға әйләндереп, гөрләүеккә алып барып ҡуша. Ысынлап та, был осраҡта ҡар башына ҡар етә. Бәлки, был хәл-күренештең термо-географик аңлатмаһы ла барҙыр. Тик тәбиғәттең ошо күренешенә генә ҡарап әйтелгәнме икән "Ҡар башына ҡар етә" тигән хикмәтле һүҙбәйләнеш? Һүҙбәйләнеш әйтем формаһы алып, халыҡ хәтерендә икән, тимәк, уның төпкәрәк һалынған башҡа мәғәнәһе лә бар.

Һүҙҙе ситтәнерәк башлап, иң тәүҙә шундай һорауға яуап эҙләйек: ике кеше талашып йә һуғышып китһә, уларҙың кемеһе ғәйепле? Ыҙғышты башлап ебәреүсеме, әллә ыҙғышҡа юл ҡуйыусымы? Әлбиттә, икенсеһе. Тимәк, ике кешенең талашып йә һуғышып китеүендә аҡыллыһы ғәйепле. Аҡыллы кеше ыҙғышырға сәбәп булған хәлдә лә, мөнәсәбәттәрҙе нисек тә көйләргә ынтыла. Тағы ла шундай дилемма: аҡыллы зирәктән ҡайһы яғы менән айырыла? Эйе, аҡыллы кеше иң ауыр ситуациянан да сығыр юлды таба белә, ә зирәк кеше, эйе, бындай ситуацияға ҡалмай, йәғни зирәклеге менән бындай ҡәртә-ҡаршылыҡтарҙы алдан тойоп, уларҙы урап үтә белә.

Шулай уҡ көрәштә еңелеүсенең һәләкәтендә еңеүсенең уға ҡарағанда көслөрәк, таҫыллыраҡ, сосораҡ, сыҙамлыраҡ булыуы төп сәбәп була алмай. Һәр хәлдә, ситтән ҡарап тороусылар еңеүсенең ошо сифаттары еңелеүсенең шундай сифаттарынан көслөрәк булыуы уны еңеүгә алып килде, тип билдәләһә лә, төп сәбәп бит еңелеүсенең үҙендә. "Еңеүсене тәнҡитләмәйҙәр", тиҙәр, урыҫтар. Еңеүсенең һәр йәһәттән еңелеүсенән көслөрәк булыуы түгел, еңелеүсенең еңеүсенән күпкә ҡайтыш булыуы ошо хәлгә алып килә. Был хәл еңелеүсе өсөн "Ҡар башына ҡар етә" тигән формулаға тиң. Ҡар башына ҡар етә - еңелеүсе үҙенең көсһөҙлөгө арҡаһында еңелә. Әлбиттә, бында һүҙ спорт тураһында бара. Ә бит тормоштоң, донъяның ниндәй генә өлкәһен алып ҡарама, бар ерҙә лә көслөләр еңеүгә өлгәшә һәм был - тормош диалектикаһы.

Ошо хәл-күренеште аңлатҡан фәлсәфә беҙҙең халыҡ йырҙарында ла сағылыш тапҡан:

Крепостной ҙа юлы, ай, ҡарағай,
Ҡарағайға ҡарап үтмәй һис ярамай.
Үҙ башҡайҙарыңа ҡайғы төшһә,
Кешеләрҙән күреү һис ярамай, -

тип йырлай торғайны Тайфа ҡартәсәйем. Үкенескә ҡаршы, ул саҡта малай инем, йырҙың тулы һүҙҙәрен дә, көйөн дә отоп ҡалмағанмын. Бында, әлбиттә, "крепостной" һүҙе хәҙерге Баймаҡ районындағы Крепостной Йылайыр тигән ауылға бәйле алынған. Шулай ҙа йырҙың мәғәнәһенә ҡарата был һүҙ бик һағайта. Сөнки үҙ-үҙҙәрен ирекһеҙләп, үҙ-үҙҙәрен, шәхес азатлығын, мөмкинлектәрен "крепостнойлыҡ" ҡоллоғона бикләп, барлыҡ уңышһыҙлыҡтарын башҡаларға япһарып, бәләләрен башҡаларҙан күреп йәшәүселәр бихисап был донъяла. Был хәл бигерәк тә һуңғы егерме йыл эсендә ныҡ сағылыш тапты. Донъялар үҙгәреп, колхоз-совхоздар емерелеп, күптәр эшһеҙ ҡалғас, шул замандан алып ҡыл да ҡыбырҙатмайынса, һаман да колхоз-совхоздарҙы емереүсе Горбачев менән Ельцинды әрләп тик ятыусылар һаман да бар ауылдарҙа. Шул арала ситтәр килеп, ерҙәребеҙҙе күпләп һатып алырға ынтыла. Ситтәр ерҙәребеҙҙе ҡулына төшөрөп, ҡәүемдәре менән күсеп килеп, урындағы халыҡ ерһеҙ, сабынлыҡһыҙ, көтөүлөкһөҙ тороп ҡалһа, ысынлап та, "Ҡар башына ҡар етә" инде.

Һүҙемә дәғүә белдереүселәр ҙә табылыр. Мин уларға шулай тип яуап бирәм һәр саҡ: колхоздар һәм совхоздар төҙөлгәнгә тиклем халҡыбыҙ нисәмә меңәр йылдар йәшәгән һәм колхоз-совхоздар булмаған өсөн генә эшһеҙ һәм ашһыҙ ултырмаған. Башҡорт ҡыҙына өйләнгән бер үзбәк егете Башҡортостанға килеп, өс йылдан ашыу кәләшенең ауылында йәшәп китте һәм, әйтергә кәрәк, ауылда нисек йәшәргә була, тигән темаға "мастер-класс" үткәреп китте. "Эх, һеҙ, башҡорттар, Хоҙай тарафынан бирелгән ошондай мөмкинлектең ҡәҙерен белмәйһегеҙ. Эх, һеҙҙәге ерҙәрҙең иркенлеге, һеҙҙәге мөмкинлек беҙҙең үзбәктәргә эләкһәме, хан һарайҙары кеүек йорттар һалып, алтын-көмөшкә мансылып йәшәр инек", тине ул. Мөшәрип ауылға килгәндең тәүге йәйендә еләк йыйып һатып ҡына "Волга" машинаһы һатып алды, икенсе йылына "ДТ-20" тракторы хәстәрләне. Күп итеп ер алып, йәшелсә-емеш, картуф сәсергә, ҙур итеп йорт һалырға ҡәһәтләнеп кенә йөрөй ине, бер туған ағалары килеп, уны һәм ғаиләһен елтерәтеп алып ҡайтып киттеләр. Үзбәктәрҙә ир-аттың тыуған ерендә йәшәүе - ҡәтғи үтәлергә тейешле яҙылмаған закон.

"Ҡар башына ҡар етә" әйтеме вайымһыҙлығы, битарафлығы, ғәмһеҙлеге, ялҡаулығы, мәнһеҙлеге, бешәлкәһеҙлеге, маңҡортлоғо, баҫымсаҡлығы арҡаһында үҙ-үҙен юҡҡа сығарған, кешелек һәм милли асылын юғалтҡан әҙәмгә ҡарата ҡулланылған. Айырым кешене, милләтте, илде, дәүләтте бер ваҡытта ла икенсе кеше, икенсе милләт, икенсе ил, икенсе дәүләт юҡҡа сығара, бөтөрә алмай. Әгәр ҙә улар был хәлгә дусар ителә икән, бында тик үҙҙәре генә ғәйепле тигәнде аңлата булыр "Ҡар башына ҡар етә" әйтеме. Һис шикһеҙ, милли идеяға торошло был һүҙбәйләнеш.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

---

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# МИЛЛӘТКӘ КӘРӘК БАҪМА

Мин үҙем башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы буларaҡ, милли мөхитте булдырырға, һаҡларға ярҙам итеүсе күп баҫмалар алдырам. Шулар араһында барыбер ҙә иң уҡымлыһы, фәһемлеһе, күңелгә ятышлыһы - "Киске Өфө". Ятраҡан гәзитем милли рухты, милли үҙаңды үҫтерергә, онотолоп барған дини йолаларыбыҙҙы, кәсептәребеҙҙе тергеҙергә тырышыусы баҫма булыуы менән айырылып тора. Ишембай районы Һарғай ауылында дини ҡанундарҙы үтәп йәшәүсе әсәйем Ғиләжева Рәйсә Шәйхетдин ҡыҙы әйтеүенсә, милләтебеҙгә шул тиклем кәрәкле, үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр кеше алдырып уҡырға тейешле гәзит ул "Киске Өфө"! Гәзитте ҡат уҡып сыҡҡас, мин әсәйем, туғандарым, дуҫ-иштәрем менән күп темалар буйынса фекер алышам. Ә темаларҙың төрлөлөгө иҫ киткес күп, бөтәһе лә ҡыҙыҡһындырырлыҡ.

Быйыл Өфөлә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2011" төбәк-ара конкурсында ҡатнашып, "Теоретик маһирлыҡ" номинацияһында еңеүсе булдым. Ошо тантанала "Киске Өфө" гәзитенең Маҡтау ҡағыҙын алыу иң шатлыҡлы мәлем булғандыр. Гәзитемдең бүләге - зауыҡ менән биҙәлеп эшләнгән "Әхлаҡи васыят"ты иһә өйөбөҙгә килгән һәр кеше ҡыҙыҡһынып уҡый, ҡайһы берәүҙәр хатта күсереп ала! Хоҙай Тәғәлә гәзит коллективына оҙон-оҙаҡ йылдар иҫәнлектә-һаулыҡта, халҡыбыҙға тура юл күрһәтеп йәшәргә, ижад итергә насип ҡылһын!

**Әлфинур РӘХМӘТУЛЛИНА.**
**Салауат ҡалаһы.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың һәләтле балалары һәм йәштәре менән түңәрәк ҡор ҙа үткәрҙе 1-се канал ҡунаҡтары. Улар йыйылыусыларға үҙҙәренең уңыш серҙәре тураһында һөйләне. Аҙаҡ халыҡ-ара Хәйриә фонды стипендиаты Искәндәр Ханнанов, Өфө дәүләт сәнғәт училищеһы студенты Диана Нурмөхәмәтова ҡунаҡтар алдында сығыш яһап, уларҙы үҙ таланты менән һоҡландырҙы.

✓Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се балалар йортонда ла көтөп алдылар ҡунаҡтарҙы. Был хәйриә акцияһы сиктәрендә "Йәйғор" компаниялары төркөмө балалар йортона 500 меңдән ашыу аҡсалата ярҙам күрһәткәйне. Ошо аҡсаға мәғариф учреждениеһында компьютер класы асылды, заманса моноблоктар, интерактив таҡта, видеокамера, микрофон һәм башҡа телекоммуникация аппараттары һатып алынды. Мәскәү ҡунаҡтары уҡыу йорто менән танышып сыҡҡас, балалар ойошторған ысын башҡорт һабантуйын тамаша ҡылды.

✓"Беренсе бул!" акцияһында ҡатнашыусылар Өфөнөң Якутов исемендәге паркында булып, балалар тимер юлын асыу тантанаһында ҡатнашты. Теннис буйынса республика балалар-үҫмерҙәр мәктәбенең мөмкинлектәре сикләнгән тәрбиәләнеүселәре менән осрашты, уларҙың "Ҡыҙғылт һары туп" исемле спорт уйынын ҡараны. Ҡунаҡтарҙы "Динамо" стадионында ла көтөп алдылар. Бында мөмкинлектәре сикләнгән балалар менән "Күңелле старттар" үтте. Аҙаҡ Мәскәү ҡунаҡтары менән Башҡортостандың йәш спортсылары араһында футбол матчы ойошторолдо.

✓Акция ярҙамында Өфөнөң "Башҡортостан" киностудияһы базаһында Балалар визуаль ижад үҙәге асылды. Мәскәү ҡунаҡтары уның "Родина" кинотеатрында үткән исем туйында ҡатнашты. Байрам "Өфө-Арена"ла Рәсәйҙең билдәле артистары, 1-се каналдың алып барыусылары ҡатнашлығындағы концерт менән тамамланды.

✓10 июндә БДУ-ның Сибай институты (филиалы) базаһында "Урал батыр" һәм донъя халыҡтарының рухи мираҫы" тип аталған II халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Тәүге конференция былтыр Өфөлә ноябрҙә уҙғарылып, унда 300-ҙән ашыу ғалим ҡатнашҡайны. Сираттағы сара башҡорт халҡының үлемһеҙ әҫәрен ЮНЕСКО-ның "Кешелектең ауыҙ-тел һәм матди булмаған мираҫы гәүһәрҙәре" исемлегенә индереү буйынса эште әүҙемләштереү маҡсатында ойошторола.

**✓ Иҫәптә торған эшһеҙҙәр араһында башланғыс профессиональ һәм урта белеме булғандар 52,4 процентты, урта профессиональ һәм юғары белемлеләр 20,5 процентты тәшкил итә. Бына ошо бөгөнгө "эшһеҙ кеше" портреты.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЕРГӘ - ТӘРБИӘ

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарары менән 2011 йылда ауыл хужалығы етештереүселәренә ерҙең уңдырышлылығына ярҙам итеү буйынса республика бюджетынан субсидия биреү тәртибе раҫланды.** Субсидиялар Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығына йылдың тәүге яртыһына ошо йүнәлештә эшләгән эштәре буйынса - 5 июлгә, йылдың икенсе яртыһы буйынса 15 ноябргә тиклем тапшырған документтары нигеҙендә барлыҡ формалағы ойошмаларға бирелә. Бында төп шарт булып ҡалдау ерҙәрҙе ауыл хужалығы культураларын сәсеү әйләнешенә индереү маҡсатында химик эшкәртеү һәм тупраҡҡа агрохимик мелиорация үткәреү (эзбиз, фосфор индереү) тора. Ошо йүнәлештә республика бюджетынан 64 756,5 мең һум аҡса бүлеү ҡаралған.

## ҒҮМЕРҘӘР ҠОТҠАРЫЛЫРМЫ?

**Республикала БМО тарафынан иғлан ителгән "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса эшмәкәрлектең тиҫтә йылдары" тип аталған сараға старт бирелде.** Ул юл-транспорт ваҡиғаларына юл хәрәкәтенә мөнәсәбәте булған барлыҡ ҡатнашыусыларҙы ылыҡтырып, проблеманы комплексы хәл итеүгә йүнәлеш тота. Проект 2011-2020 йылдарға иҫәпләнгән. Уның һөҙөмтәһе булып юлдағы фажиғәләрҙең кәмеүе торорға тейеш. Бөгөн көн һайын донъяла юл-транспорт ваҡиғаларында 1,3 миллион самаһы кеше һәләк була, 50 миллион самаһы кеше төрлө йәрәхәттәр ала. Башҡортостанда былтыр ғына юлдарҙа 658 кеше үлгән, 6443 кеше төрлө кимәлдәге йәрәхәт алған. Быйыл иһә был һандар 149 һәм 1580 кеше тәшкил итә.

## ШВЕЙЦАРИЯ ТӘЖРИБӘҺЕ ЯРАП ҠАЛЫР

**Швейцария белгестәренең ВИЧ-инфекцияны һәм наркоманлыкты профилактикалау тәжрибәһе Башкортостанда ла ҡулай булыуы ихтимал.** Һуңғы 20 йыл эсендә был илдә наркобәйләләр һаны кәмеүгә табан бара, әммә ВИЧ-инфекциялылар менән хәл-торош ҡатмарлы булып ҡала. Шуға ла унда профилактика саралары ике йүнәлештә алып барыла: ВИЧ-инфекциялылар буйынса - айырым, наркомандар буйынса - айырым. Шулай уҡ Швейцарияла наркоман бер ҡулланған шприцын яңыһына алмаштыра ала, был икенсе кешене зарарлауға юл ҡуймай. Башҡортостанда ВИЧ-инфекциялыларҙың электрон менеджменты медицина программаһын индереүҙе лә тәҡдим итә улар. Был сирҙең даими мониторингын, инфекция йөрөтөүселәрҙе диспансер тикшереүҙең, В, С гепатиттарының хроник вирустары торошон тикшереүҙең, ретровирусҡа ҡаршы юғары әүҙем терапия үткәреү мөмкинлеген бирәсәк. Бөгөн Башҡортостанда 11332 ВИЧ-инфекция йөрөтөүсе асыҡланған. Улар 21-40 йәшлек хеҙмәткә яраҡлы контингент. Йыл башынан был һанға тағы ла яңы 700 кеше өҫтәлгән.

ХЕҘМӘТ БАҘАРЫ

**Кешенең ярты ғүмере эштә үтә. Тик һәр кемгә үҙенә оҡшаған, лайыҡлы килем килтергән эш урыны табыу ауырға төшә. Кемдер туғандары һәм дуҫтары, ә кемдер төрлө агентлыҡтар аша эш урыны эҙләй. Ләкин быңдай юлдарҙың беренсеһе оҙаҡ ваҡыт талап итһә, икенсеһе мутлашыусылар ҡулына барып эләгеүҙән һаҡламай. Шуға күрә халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәктәренә мөрәжәғәт итеү иң әһәмиәтле һәм ышанслы юл булыуын был мәсьәлә менән осрашҡандар яҡшы аңлай. Быйыл "Рәсәй Федерацияһында халыҡты эш менән тәьмин итеү тураһында" Закон ҡабул ителеүгә һәм Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт хеҙмәте ойошторолоуға 20 йыл тулды. Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы етәксеһе Тимерхан Сабит улы БИККИНИН менән осрашып, республиканың хеҙмәт баҙарындағы хәл-торош хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**



# ЮРИСТ ҺӘМ ИҠТИСАДСЫ КӘРӘКМӘЙ,

## ә бына эшсе һөнәрҙәренә ҡытлыҡ бар

**▸ Тимерхан Сабит улы, бөгөн республикалағы "эшһеҙ кеше" кем ул?**

- Май айы статистикаһына күҙ һалһаҡ, әле республиканың эш менән тәьмин итеү үҙәктәрендә иҫәптә торыусылар араһында ҡатын-ҡыҙҙар - 58 процент, 16 йәштән 29 йәшкә тиклемге йәштәр - 24 процент, пенсия йәшенә етеп барыусылар 10 процент тәшкил итә. Шулай уҡ ауыл халҡының 40,5 проценты эшһеҙ статусында. Ә 2000 йылға тиклем ауылда 25 сутый ере булған кешене, законға ярашлы, эшһеҙ тигән статус биреп, иҫәпкә ҡуйып булмай ине. Белем торошона килгәндә, иҫәптә торған эшһеҙҙәр араһында башланғыс профессиональ һәм урта белеме булғандар 52,4 проценты, урта профессиональ һәм юғары белемлеләр 20,5 процентты тәшкил итә. Бына ошо бөгөнгө "эшһеҙ кеше" портреты.

**▸ Ҡайһы өлкәлә кадрҙар "артыҡ" һәм, киреһенсә, ҡайһы өлкәлә кадрҙарға "кытлыҡ" күҙәтелә?**

- 2011 йылдың 1 майына ойошмалар һәм предприятиелар тарафынан беҙҙең Идаралыҡҡа 32464 вакансия хаҡында мәғлүмәт бирелгән (2010 йылдың ошо уҡ осорона - 22401) һәм был һандың 82 проценты эшсе һөнәрҙәргә тура килә. Эшсе ҡулдарға айырыуса эшкәртеү сәнәғәте, төҙөлөш, күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу, белем биреү предприятиелары мохтаж. Республика буйынса дөйөм алғанда, һорау (эшсе кәрәк булған урындар, ойошмалар хәбәр иткән буш эш урындары һаны) тәҡдимгә (эш эҙләүсе кешә) ҡарағанда күберәк һәм һорау башлыса бетон һалыусы, газ менән иретеп йәбештереүсе, бесеүсе, ташсы, кондуктор, түбә ябыусы, маляр-буяусы, экскаватор машинисы, киң профилле механизатор, монтажсы, парикмахер, икмәк бешереүсе, тегеүсе, көнкүреш тауарҙары һатыусы, слесарь, токарь, фрезеровщик, электрик кеүек һөнәрҙәрҙе үҙ эсенә ала. Хеҙмәткәрҙәр араһында страховкалау агенттары, балалар врачы, терапевт, технолог һәм фельдшерҙар ҙур һорау менән файҙалана. Ә китапханасы, бухгалтер, кассир, лаборант, менеджер, механик, полиция хеҙмәткәре, сәркәтип, социаль хеҙмәткәрҙәр, техник, иҡтисадсы, экспедитор, юристар бөтөнләй тиерлек талап ителмәй.

**▸ Башҡортостанда бөгөн үҙ эшен асырға теләүселәргә хөкүмәт уңайлы шарттар тыуҙыра. Ошо юҫыкта Идаралыҡ ниндәй эш алып бара?**

- Халыҡты эш менән тәьмин итеү органдары халыҡҡа үҙ эшен асыуға ярҙам итеү маҡсатында бер-нисә йүнәлеш буйынса эш алып бара. Улар иҫәбендә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген башларға теләүселәргә ойоштороу, мәғлүмәти, хоҡуҡи ярҙам күрһәтеү буйынса консультациялар үткәреү, бизнес-план төҙөргә һәм уға экспертиза үткәреүҙә ярҙам итеү, эшҡыуарлыҡты теркәү өсөн кәрәкле документтарҙы әҙерләү өсөн аҡса бүлеү, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләгәндәргә үҙ эшен башлап ебәреүгә һәм эш урындары булдырыуға 58800 һум күләмендә субсидиялар бүлеү кеүек төрлө саралар ҡаралған. 2010 йылда беҙҙең үҙәктәрҙә үҙ эшен башларға теләүсе 3615 кеше мәғлүмәти, ә 1821 кеше эшҡыуарлыҡты башлауға, эшҡыуарлыҡ буйынса документтар әҙерләүгә, дәүләт пошлинаһы һәм нотариусҡа түләүгә, төрлө бланк документтарын алыуға, мисәт һәм штамп әҙерләүгә финанс ярҙамы алды. 2011 йылда Башҡортостан Республикаһында эш баҙарында көсөргәнешлекте кәметеү маҡсатында ҡабул ителгән Республика программаһына ярашлы, бәләкәй эшҡыуарлыҡ өлкәһендә 3423 эш урыны булдырыу күҙаллана.

**▸ Йәмғәт эштәрен эшһеҙҙәр һәм ваҡытлыса эшһеҙ ҡалғандарға социаль ярҙам итеүҙең бер төрө итеп һанарға буламы?**

- Беҙҙең Идаралыҡ йәмғиәт эштәрен халыҡты эшкә йәлеп итеүҙең һөҙөмтәле бер сараһы итеп күрә, сөнки улар барыһы ла эшләй алырлыҡ, ҡағиҙә буларак, өҫтәмә профессиональ әҙерлек талап итмәгән, файҙалы социаль мәғәнәгә эйә эштәрҙе үҙ эсенә ала. 2010 йылда йәмғиәт эштәрен башҡарыуға 2541 килешеү төҙөлдө һәм был эштәрҙә ҡатнашыусылар һаны 9,4 мең кешегә етте. Йәмғиәт эштәренә территорияны төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү, ауыл хужалығы өлкәһе, фатирҙарҙы йыйыштырыу, оло йәштәгеләрҙе тәрбиәләү кеүек эштәр инә. Йәмғиәт эштәрендә ҡатнашыуға төп өҫтөнлөк эшһеҙлек буйынса түләүҙәр алмаған һәм мәшғүллек үҙәктәрендә алты айҙан да артыҡ иҫәптә тормағандарға бирелә.

**▸ Бөгөн һәр яҡтан сәләмәт кешегә эш мәсьәләһен хәл итеү ауырға төшә, ә инвалидтарға - айырыуса. Уларға эш урындары табыу мәсьәләһе нисек ҡуйылған?**

- Инвалидтарҙы профессиональ реабилитациялау эшсе системаһы рәүештә башҡарыла һәм улар квоталарға ярашлы...

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт университетында "Рәсәйҙең үҙаң проблемалары: халыҡ, интеллигенция, власть" тип исемләнгән VIII Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы булып үтте. Форум эшендә Рәсәй Фәндәр академияһы Философия институтынан философия фәндәре докторы Сергей Никольский етәкселегендәге делегация ҡатнашты. Ғалимдар Рәсәй үҙаңын үҙгәртеү, кеше үҙаңында архаик, традицион һәм инновацион башланғыстарҙың үҙ-ара тәьҫире, Рәсәйҙә граждандар йәмғиәте үҫешенең социомәҙени аспекттары кеүек мәсьәләләрҙе тикшерҙе.

✓Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшереү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов РФ Мәғариф һәм фән министрлығы Юғары аттестация комиссияһының эксперт советы составына индерелгән.

✓Республика автоинспекторҙары "Мотоцикл" операцияһы уҙғара. Башҡортостанда былтыр 117 мең мототранспорт теркәлгән. Техосмотрға 8887 мотоцикл килтерелгән, шуларҙың 7 меңгә яҡыны ғына төҙөк булған. Йыл башынан мотоцикл һәм мотороллерҙар ҡатнашлығында теркәлгән 18 юл-транспорт ваҡиғаһында дүрт кеше һәләк булған, 20 кеше йәрәхәтләнгән. Былтыр шундай 199 авария яһалған, уларҙа 27 кеше һәләк булған, 238 кеше төрлө дәрәжәләге тән йәрәхәттәре алған. Операция 10 июлгә тиклем дауам итәсәк.

✓Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге ойошторолоуға 60 йыл тулыуға арналған таҡтаташ асылды. 1961 йылдан 2006 йылға тиклем Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге президиумы урынлашҡан был йортта (К. Маркс урамы,6) бөгөн Башҡортостан ғалимдары көсө менән булдырылған археология һәм этнография музейы урынлашҡан.

✓Йылдың беренсе кварталында Рәсәй банкылары халыҡты ылыҡтырмай башлаған. Былтыр ошо осорҙа халыҡ 309 миллиард һумлыҡ депозит аса, быйыл был күрһәткес ни бары 197,6 миллиард һум тәшкил итә. Был күренеште аналитиктар вкладтар буйынса процент ставкаларының инфляция менән сағыштырғанда түбән булыуына бәйләй. Беренсе кварталда 100 эре банктың 52-һендә ставкалар кәмеүе күҙәтелһә, ни бары 14 банк ҡына ставкаларын күтәргән.

лы вакантлы урындарға эшкә урынлаштырыла. 2010 йылда беҙҙең үҙәктәргә мөрәжәғәт иткән 4761 инвалидтан 1440 кеше эшкә урынлаштырылды. 2010 йылдың 26 ғинуарында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тарафынан "Предприятиелар һәм ойошмаларҙа инвалидтарҙы эшкә урынлаштырыуға эш урындарын квоталау буйынса ҡағиҙәне раҫлау тураһында"ғы ҡарар ҡабул ителде һәм бөгөнгө көндә уның эшләп килә. Квота штатында 100 кешенән күберәк предприятиеларға 2 процент күләмендә бирелә. 2010 йылда инвалидтарҙы эшкә алыу буйынса 8383 эш урынына квота бирелгән. Былтыр квота иҫәбенә 771 инвалид эшкә урынлаштырылған һәм 4711 эш урыны һаҡлап ҡалынған. Быйылғы йылда 7781 эш урыны квоталанған, шул иҫәптән эш урынын һаҡлауға 4916 эш урыны ҡаралған. Шулай уҡ хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнешлекте кәметеүҙе күҙаллаған өҫтәмә саралар тураһындағы Республика программаһына ярашлы, былтыр эш биреүсегә 30 мең һумға тиклем субсидия бүлеү ярҙамында инвалидтарға 120 эш урыны булдырылды. Был сара 2011 йылда ла һаҡланды һәм быйыл инвалидтар өсөн 94 эш урыны булдырыу ҡаралған. Субсидия күләме быйыл 50 мең һумға тиклем.

**▸ Оҙаҡламай уҡыу йорттарын тамамлаған йәш белгестәр хеҙмәт баҙарын тулыландырасаҡ. Ә беҙҙә, белеүебеҙсә, нәҡ йәштәргә лайыҡлы эш урыны табыуы ауырға төшә. Ләкин нәҡ йәш белгестәрҙең хеҙмәт баҙарын формалаштырыуҙа ҙур роль уйнауын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамайҙыр. Ошондай йәштәргә Идаралыҡ ниндәй ярҙам күрһәтә?**

- 2010 йылда беҙгә 7,3 мең профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарын тамамлаған йәш белгестәр мөрәжәғәт итте, шуларҙың 4,6 меңе ваҡытлыса йәки даими эшкә урынлаштырылды. Идаралыҡтың йәштәрҙе эшкә урынлаштырыу буйынса мөмкинлектәре етерлек. "Башҡортостан Республикаһында халыҡты эш менән тәьмин итеүгә булышлыҡ итеү" Программаһына ярашлы, Идаралыҡ йәштәрҙе вакантлы урындарға даими эшкә урынлаштырыу, башланғыс һәм урта профессиональ белеме булған, беренсе тапҡыр эш эҙләгән йәштәрҙе, федераль бюджеттан 1955 һум күләмендәге матди ярҙам күрһәтеп, ваҡытлыса эшкә урынлаштырыу һәм башҡа төр саралар тәҡдим итә. Шулай уҡ төрлө предприятиелар һәм ойошмалар менән килешеү нигеҙендә йәш белгестәргә алты айлыҡ стажировкаға ебәрәбеҙ. Бындай стажировканың төп маҡсаты - йәш белгестәрҙе даими эшкә урынлаштырыу, уларҙың эш коллективтарында социаль һәм профессиональ адаптация үтеүенә булышлыҡ итеү, ойошма коллективтарын юғары белемле йәш белгестәр менән тулыландырыу. 2010 йылда ошондай стажировканы 3715 йәш белгес үтте, ә быйыл иһә был һан 1818-гә тиң.

**▸ Йәйге каникулдар башланды. Уҡыусы балаларҙы ваҡытлыса эш менән тәьмин итеү нисек ойошторолған?**

- Беҙҙең Идаралыҡҡа 14 йәштән алып 18 йәшкә тиклемге бәлиғ булмағандарҙы ваҡытлыса эш менән тәьмин итеү хоҡуғы бирелгән. Үҫмерҙәр башлыса ауыл хужалығында, йорт йыйыштырыу, мәктәп, спорт һәм балалар майҙансыҡтары, урам һәм парктарҙы төҙөкләндереүҙә ҡатнаша. Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл хеҙмәте ветерандарына ярҙам күрһәтә. Үҫмерҙәрҙе ваҡытлыса эшкә урынлаштырыу программаһында етем балалар, ата-әсә тәрбиәһенән мәхрүм булғандар, бәлиғ булмағандар комиссияһында иҫәптә тороусылар һәм ҡарауһыҙ ҡалған ғаиләнән сыҡҡандарға өҫтөнлөк бирелә. Быйыл 27 мең үҫмергә ваҡытлыса эш урыны булдырыу ҡаралған.

**▸ Әгәр ҙә кешегә Өфөлә йә иһә республикала яраҡлы эш урыны булмаһа, Идаралыҡ икенсе төбәктә эш табырға ярҙам итергә мөмкинме?**

- Былтыр республикаһың мәшғүллек үҙәктәре тарафынан 507 кеше сит региондарға эшкә ебәрелде, шуларҙың 490-ы вахта буйынса һәм 17-һе ваҡытлыса эшкә урынлаштырылған. Башҡа өлкәләрҙәге предприятиелар һәм ойошмаларҙағы эш урындары хаҡында мәғлүмәт административ регламент талаптарына ярашлы алып барыла. Идаралыҡ предприятие һәм ойошмаларҙың ойоштороу-хоҡуҡи формаһының ниндәй булыуына ҡарамай хеҙмәттәшлек итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Егерме йыллыҡ эш дәүерендә БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы ҡарамағындағы Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы үҙенең мөһимлеген һәм кәрәклеген иҫбат итте. Ошо йылдар эсендә Идаралыҡҡа барлығы 2 миллиондан ашыу кеше мөрәжәғәт иткән һәм уларҙың 1,2 миллионы эшкә урынлаштырылған, ә был республиканың өстән бер өлөшө тигән һүҙ.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# МАШИНАҢ МӘШӘҠӘТТӘРЕ... бер аҙға кәмергә мөмкин

**2011 йылдың 27 майында машиналарҙы техник күҙәтеү үткәреүҙе күпкә еңеләштереүҙе күҙаллаған Рәсәй Хөкүмәте ҡарары баҫылып сыҡты һәм ул 4 июндән үҙ көсөнә инде.**

Был ҡарарға ярашлы, 2011 йылда дәүләт техник күҙәтеүе үтергә тейешле автомобилдәргә был ваҡыт бер йылға, йәғни 2012 йылға тиклем, оҙайтылды. Шулай итеп, Хөкүмәт дәүләт техник күҙәтеүенә 12 айға мораторий индерҙе. Шулай уҡ Владимир Путин үҙ ҡарары менән "йәштәре" бер йылдан үтмәгән машиналарҙы техник күҙәтеү үтеүҙән бөтөнләй азат итте. Бындай машина хужаларына талондар тикшереү үткәрелмәйенсә бирелергә тейеш. Ҡарар масса ауырлығы 3,5 тоннанан артмаған еңел һәм йөк машиналарына, тағылмаға һәм ярымтағылмаларға, шулай уҡ моторлы транспорт сараларына ғына ҡағыла, ә коммерция нигеҙендә пассажирҙарҙы йөрөтөүсе еңел машиналарға, пассажир урыны, водителдекенән тыш, 8 урындан арткан, системалы рәүештә кешеләрҙе йөрөтөү өсөн үҙгәртеп төҙөлгән йөк машиналарына, хәүефле йөктәрҙе ташыусы транспорт һәм уның тағылмаларына, махсус сигналлы һәм уҡытыу машиналарына ҡағылмай.

Автомобилдәргә дәүләт техник күҙәтеүе уҙғарыуҙы ябайлаштырыу йәки бөтөнләй юҡҡа сығарыу хаҡында фекерҙе Рәсәй Президенты "Единая Россия" партияһы менән осрашыу барышында яңғыраткайны. "Бөгөнгө техник күҙәтеү уҙғарыу системаһы, айырыуса ҙур ҡалаларҙа, үҙен бөтөнләй аҡламай. Әгәр ҙә машина яңы икән, уға бер ниндәй ҙә тикшереү талап ителмәй, шул уҡ ваҡытта "гайка тулы биҙрә"лә йөрөгән водитель дә шул уҡ талонды аласаҡ, ләкин инде бөтөнләй икенсе юл менән. Шуға күрә был өлкәлә тиҙ арала тәртип булдырылырға тейеш", - тине ул. Ул шулай уҡ дәүләт техник күҙәтеүен йәки бөтөнләй бөтөрөргә, йәки Эске эштәр министрлығы ҡарамағынан алырға тәҡдим итте. Күпселек илдәрҙә дәүләт техник күҙәтеүен шәхси автомобиль сервистары уҙғара һәм күп осраҡта ул техник хеҙмәтләндереү менән бергә алып барыла, бары тик Рәсәйҙә генә был Эске эштәр министрлығы ҡарамағында. "Полиция тураһында"ғы Законға ярашлы, Эске эштәр министрлығы 2012 йылдың 1 ғинуарынан был эшмәкәрлектән азат ителеп, был функция шәхси структураға тапшырыласаҡ, тип күҙаллана. Был хаҡтағы закон туғыҙ ай элек үк беренсе уҡыуҙарҙы үтеп, төҙәтеүҙәр индереү өсөн Хөкүмәткә ебәрелгән. Законды Дәүләт Думаһында икенсе уҡыуҙарҙы ҡаҫан үтеүе билдәһеҙ. Шул уҡ ваҡытта машиналарға техник күҙәтеү үткәреүҙе бөтөнләй юҡҡа сығарып булмаясаҡ, тип билдәләй экспперттар, сөнки был осраҡта бер машина ла, Вена конвенцияһына ярашлы, Рәсәйҙән сит илгә сыға алмаясаҡ.

*ХОККЕЙ*

# "САЛАУАТ ЮЛАЕВ"ТА - ЯҢЫ ТРЕНЕР!

**Хоккей сезоны күптән тамамланыуға ҡарамаҫтан, "Салауат Юлаев" хоккей командаһы көйәрмәндәрен ошоғаса көсөргәнешле һәм борсоулы уйҙар ташламаны. Яраткан командабыҙҙы артабан еңеү үрҙәренә ниндәй тренер алып барасағы ла, уйынсылар составының үҙгәреүе хаҡында ла тулы мәғлүмәт булманы. Ниһайәт, ошо көндәрҙә клуб етәкселеге был хаҡта хәбәр итте.**

"Салауат Юлаев" командаһының баш тренеры итеп Сергей Михалёв тәғәйенләнде. Көйәрмәндәргә яҡшы таныш тренер клуб менән бер йыллыҡ контракт төҙөнө. Сергей Михалёв "Салауат Юлаев" командаһы тренеры булып 1987-1990 һәм 2005-2009 йылдарҙа эшләне, ә 2007-2008 уйын сезонында команданы беренсе тапҡыр Рәсәй чемпионы итеүгә өлгәште. Шуға күрә, уның тренер итеп тәғәйенләнеүе "Салауат Юлаев"тың артабан да юғары еңеү баҫҡысында буласағына ышаныстыарттыра. Команда уйынсылары составында ла үҙгәрештәр етерлек. Команданан Патрик Торесен, Владимир Антипов, Александр Еременко, Дмитрий Калинин, Вячеслав Козлов, Александр Рязанцев һәм Кирилл Кольцов китһә, "Себер"ҙән Игорь Миронов һәм Магнитогорскиҙың "Металлург"ында уйнаған Виталий Атюшов Өфө командаһы менән ике йыллыҡ контракт төҙөнө.

Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең иң көслө хоккей командаһының финанс ярҙамһыҙ ҡалыу мөмкинлеге лә бар, сөнки "Салауат Юлаев" командаһының төп бағыусыһы, "Урал" мәрхәмәтлек фонды клубты артабан финанслауҙы ваҡытлыса кисектереү хаҡында белдерҙе. Үҙенең был ҡарарын "Урал" фонды "клубтың финанс эшмәкәрлегенән асыҡ булмауы" менән аңлатты. Үҙ сиратында, республика Президенты Рөстәм Хәмитов "был һорауҙы хәл итеүҙә икенсе варианттар ҙа табыласаҡ һәм клубты финанслау элекке кимәлдә ҡаласаҡ", тип белдерҙе.

Нисек булһа ла, был һорау тиҙ арала хәл ителер һәм республикабыҙҙың визит карточкаһы булған "Салауат Юлаев" командаһы бер ниндәй финанс ауырлыҡтар кисермәй, киләһе уйын сезондарында ла, быйылғы кеүек, тик яҡшы күрһәткестәр менән беҙҙе ҡыуандырыр, тигән өмөттәбеҙ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Үгәй инә үләне



Сәскәһе япрағынан алда сыға. Уны йыйғас, тиҙ киптерергә кәрәк. Кипкән сәскәһенән бешерелгән сәй тамаҡ төбө ауыртҡанда, тамаҡ ҡарлыҡҡанда файҙалы, йүтәлдә лә бөтәрә. Сәскәләренә япраҡтарын да ҡушып ҡайнатһаң, ашҡаҙан, бөйәр ауырыуынан, һейҙәк ҡыуығы сиренән дауалай.

### Ҡара ҡарағат

Йыл миҙгеле үҙгәреүе кеше психикаһына йоғонто яһай. Айырыуса көҙ һәм яҙ. Был осорҙа баш мейеһен туҡландырыусы матдәләр (гормон) етмәй. Бынан ҡотолоу өсөн 4-6 аҙна буйы көнөнә 1-2 сынаяҡ ҡара ҡарағат япраҡтарынан яһалған сәй эсергә кәрәк. Был сәй психик хәл өсөн кәрәкле гормондарҙы алмаштыра, организмға ыңғай йоғонто яһай.

### Сөгөлдөрҙөҙ үҙ итегеҙ

Ҡырғыҙстан үткәрелгән сөгөлдөр һутына бал ҡушып, 2 сәғәт асыҡ һауытта тоторға һәм көн һайын эсергә. Был дауа гипертоник сирҙәрҙе дауалай. Сей һәм бешкән сөгөлдөрҙән әҙерләнгән ризыҡтар эс ҡатыуҙан, аҙ ҡанлылыҡтан, йөрәк-ҡан, бөйәр ауырыуҙарынан да ҡотҡара.

### Мунса өсөн төнәтмә

Мунса өсөн төнәтмәгә ҡымыҙлыҡ, мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, ромашка кәрәк. Шул үләндәрҙең бөтәһен бергә кәстрүлгә һалып, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта ҡайнатырға. Һөҙөргә, шешәләргә тултырып, һалҡын урында һаҡларға. Бер сабыныу өсөн бер тас һыуға 70-100 гр төнәтмә етә, сабынғанда шуны аҙлап мунса ташына һибеп торорға.

Үләндәрегеҙ булмаһа, бер тас һыуға 100 гр кеүәҫ (квас) ҡушырға һәм мунса ташына һибергә. Үҙенә бер төрлө хуш еҫле быу сығара.

Үлән, кеүәҫ төнәтмәләренең быуҙары бөтә тәнгә файҙа бирә: организмды таҙарта, тән еңеләйеп ҡала.

### Ҡапыл ғына баш ауырыһа

Бер ҡалаҡ юл япрағын бер стакан ҡайнар һыуҙа бешерергә (10-15 минут), көнөнә ике мәртәбә яртышар стакан әҙ-әҙ йотоп эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҮӘТ ӘЙ!

# ИКЕ ИГЕҘӘКТЕҢ...

## ике төрлө булғаны

**Ҡояшлы иҫ киткес матур көндә Өфө ҡалаһының бер паркына юл тоттом. Йәкшәмбе булғанғалыр, халыҡ күп, ғаилә менән килеүселәр байтаҡ. Кемдер тирҙә атыша, әүһәләктә өйөрөлә, кемдер туңдырма ялай.**

Бер иштән кейенгән 7-8 йәшлек игеҙәк малайҙар иғтибарымды йәлеп итте. Улар бер туҡтауһыҙ йүгерә, шарҡылдап көлә. Бер ир менән ҡатын, күрәһең, игеҙәктәрҙең ата-әсәһе, малайҙар янына килеп: "Ә беҙ аттракционға билет алдыҡ!" - тине. Балалар "ура" ҡысҡырышып, сәпәкәйләп алды. Улар "Һыу өҫтөндәге шар" (икенсе төрлө зорбинг) аттракционына йүнәлде. Бер метр диаметрындағы үтә күренмәле шар эсенә тәүҙә беренсе малай ингәс, насос менән һауа тултырылды, шунан шар бәләкәс кенә бассейнға төшөрөлдө. Артабан игеҙәктәрҙең һыңарын икенсе шар эсенә индереп, һыуға ебәрҙеләр. Бик ирмәк! Һыу өҫтөндә ике ҙур ҡыуыҡ йөҙә, ә эсендә кеше! Бындай күренеште элек тик йәнһүрәттә генә күргәнем булғайны.

Теге малайҙарҙың береһе рәхәтләнде генә: әле бер, әле икенсе яҡҡа һикерә, ә шар талғын ғына өйөрөлә. Бала ҡыуана, үҙе атаһы менән әсәһенә ҡул болғай. Ә икенсеһе ҡурҡып, ҡымшанмай ҡатып ҡалды, "Батам, ҡотҡарығыҙ", тип мыжыны. Биш минуттан аттракциондың хужаһы, ваҡыт бөттө, тип ишараланы. Тәүге малай шар эсенән күтәренке кәйеф менән килеп сыҡты ла, әсәһен ҡосаҡлап алды. Ә икенсеһе үпкә һүҙҙәрен белдерә-белдерә, туҡтауһыҙ мыжыны.

Ошо күренеште күҙәтеп, кешеләрҙең йәшәйеше араһында уртаҡлыҡ таптым. Аттракциондағы биш минут - ата-әсә тарафынан бүләк ителгән ғүмер икән, ти. Игеҙәктәрҙең тәүгеһе ошо мөҙҙәттә рәхәтләнде генә, ә икенсеһе, үҙенең ҡурҡаҡлығы арҡаһында, ваҡытын юҡҡа үткәрҙе. Тормошта ла шулай бит! Батыр, егәрле кешеләр ғүмерен тулы ҡанлы үткәрә. Үҙенә, ғаиләһенә, дуҫ-иштәренә, туғандарына иғтибар бүлә, эшендә уңышҡа өлгәшә, йәмәғәт тормошонда ла әүҙем була. Бер көнөн дә заяға уҙғармай. Сетерекле хәлгә тарыһа, проблемаһын башҡаларға япһармай, ә уны хәл итеү юлын эҙләй. Тормошта тик үҙенең көсөнә һәм аҡылына таяна.

Арабыҙҙа ҡурҡаҡтар һәм баҙнатһыҙҙар, соҡор елкәһенең ҡолдары ла етерлек. Ундайҙар ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, үҙен йәлләтә башлай, бөтә донъяны ҡәһәрләй. Уңышһыҙлыҡтарында, унынса, ата-әсәһе, балаһы, хеҙмәттәше, күршеһе һ.б. ғәйепле. Тик үҙе генә түгел! Көндәре шуны эшләргә кәрәк, быны атҡарырға ине, тип һүҙ бутҡаһы бешереүҙән уҙмай. Йыш ҡына апатияға бирелә. Уй-хыялдарын бойомға ашырырға ла ҡурҡа ул. "Юҡ, мин быны атҡара алмайым", тип дәртен һүндерә, яңы аҙымдан ҡурҡып, үҙ-үҙенә кәртә артынан кәртә ҡуя.

Ғүмер - әсә ҡарынынан ҡәбергә тиклемге ара. Аттракциондағы ваҡыт кеүек, ул күҙ асып йомғансы бик тиҙ уҙа. Был араны ни рәүешле йәшәү һәр кемдең үҙ ихтыярында.

Ә һин игеҙәктәрҙең тәүгеһеме, әллә икенсеһеме? Ата-әсәйеңдән бүләген - аттракциондағы мөҙҙәтте - ғүмереңде юҡҡа яндырмайһыңмы? Үткән сәғәттәр, көндәр, йылдар кире әйләнеп ҡайтмаясаҡ бит! Тормошоңда үкенестәр генә булмаһын тиһәң, бер урында тик торма, күңелеңдә йөрөткән иң матур хыялдарына табан алға атла. Ҡаршылыҡтар ҙа булыр, әммә һәр ауырлыҡтан һуң иҫ киткес еңеллек килеүен онотма.

**Гүзәл БИКМӘТОВА.**

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

**Күп кенә егеттәребеҙҙең өйләнмәй, ҡыҙҙарыбыҙҙың кейәүгә сыҡмай йөрөүендә, ғаилә ҡорған хәлдә лә берегеп китә алмай айырылышыуында был йүнәлештәге ғаилә тәрбиәһенең алып барылмауын сәбәп итергә булалыр. Ысынлап та, ғаилә ҡороу, икәү-ара мөнәсәбәтте көйләү, балалар тәрбиәләү, енси тормош мәсьәләләренә беҙҙә ғаилә тәрбиәһендә бөтөнләй иғтибар бирелмәй. Ата-әсә күберәк бала үҫеп еткәс, бирелмәгән тәрбиәнең һөҙөмтәһе менән эш итеүсән. Яныраҡ бер һеңле тейешле танышым кейәүгә сыҡҡайны. Ул үҙ яртыһын осратмай оҙаҡ йөрөнө. Әлеге кейәүҙе осратҡас та минең менән кәңәшләшеп был аҙымға барҙы. Ярты йыл да йәшәмәнеләр, ул миңә борсолоп килде. Кәңәш һораны. Аңлайышлыраҡ булһын өсөн уның менән булған әңгәмәне тулыһынса килтерәм:**

# ИРҘЕ ИР ИТКӘН ДӘ,

## хур иткән дә...



- Ағай, һиңә был хаҡта бөтөнләй әйтмәҫмен дә тигәйнем. Ни эшләргә лә белмәйем, шуға килдем. Яңылыш аҙым яһауҙан да ҡурҡам. Эш шунда, ағай, миңә кейәүең менән айырылышмай сара юҡ...

-Айырылышырға? Һуң, һеҙ бит әле бергә йүнләп йәшәй ҙә башламағанһығыҙ. Сәбәбе нимәлә?

-Эсен ярып ҡарап булмай бит, ағай, мин уның ундай холоҡло икәнлеген белмәнем. Белгән булһаммы, күтәрелеп тә ҡарамаҫ инем. Һүҙ күтәрмәй, ҡыҙыу холоҡло, әсәһе менән ирешә. Әсәһен дә ихтирам итмәгән кешегә ышанып буламы ни?

-Ошолар ғына уның менән мөнәсәбәтеңде кинәт өҙөргә сәбәпме инде, туғаным? Һин бит кейәү балаҡайҙы яратып сыҡтың түгелме? Нимә, мөхәббәтегеҙ ошо ғына һынауҙы ла үтә алмаһымы ни? Бәлки, һин уны яратмағанһыңдыр, ә? Әсәһе менән мөнәсәбәтенә килгәндә, әгәр ҙә балаһы ата-әсәһе менән һүҙгә килә икән, күп осраҡта бында атай-әсәй үҙе ғәйепле, үҙенә ҡаршы һүҙ әйттерерлек итеп тәрбиәләүе менән...

-Юҡ, ағай, мин уны яратып сыҡтым. Үҙең беләһең. Сәбәптәргә килгәндә, мин уның һүҙ күтәрмәгәнен, ҡыҙыу холоҡло икәнен, әсәһе менән мөнәсәбәтен, ысынлап та, белмәй инем...

-Белгәс, ҡапыл мөхәббәтең юҡҡа сыҡтымы инде? Шундай насар кешене нисек итеп ярата алдың һуң һин, улай булғас?

-Юҡ, ул улай уҡ насар кеше түгел, ағай. Бына тигән кеше. Ярҙамсыл, гәҙел, уға таянырға, ышанырға була...

-Шулай булғас, һин шундай ҡырҡа ҡарарға килә алмайһың, туғаным. Кешенең бит төрлө сағы, төрләсә кәйефе була, ғөмүмән, кешегә кәйефенә ҡарап ҡына баһа биреүҙе дөрөҫ түгел тип һанайым...

-Нишләйем һуң, ағай, улай булғас, кәңәш бир?

-Һин уның яҡшы сифаттары күп тиһең. Шул сифаттарына сытырман йәбеш тә, шуларын үҫтер...

-Ниңә, ағай?

-Үҙенең яҡшы сифатына тоғро баһа алған ирҙең күңеле үҫә. Ирҙәр был осраҡта сабый рәүешенә инә. Ә сабыйҙы ҡайҙа теләйһең, шул яҡҡа бороп була...

-Ә уның күңелен нисек үҫтерәйем һуң, ағай?

-Картуф күмгән һымаҡ...

-Нисек инде...

-Картуфты күмер алдынан иң тәүҙә уның ян-яғындағы сүптәрен утайҙар, ерен йомшарталар, шунан һабағын көнгә күрһәтмәҫлек итеп тупраҡ менән күмеп ҡуялар...

-Ә картуф күмеүҙең ир күңелен үҫтереү менән бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ бит, ағай...

-Нишләп булмаһын, ти. Сүпте утау - уға ҡамасаулаусы әйберҙе шылдырып ҡуйыу, кәрәк сағында үҙең дә уға ҡамасау булмау, тупрағын йомшартыу - уны туҡтауһыҙ маҡтау, шәплеген иҫбат итеп тороу, ә һабаҡты тупраҡ менән күмеү - уның асылына, үҙлегенә ҡағылмау...

-Һе, ҡыҙыҡ, ағай, ә уның асылына, үҙлегенә ҡағылмауҙы нисек аңларға һуң?

-Нисек тип ни, абсолют яҡшы, йә абсолют насар кеше булмай бит донъяла. Шуға күрә, иреңдең насар йә кире холҡон, ул хатта үҙе лә танырға теләмәгән асылын, үҙлеген күрһәң дә, белһәң дә, бер ваҡытта ла был хаҡта әйтергә ярамай. Ҡыҫҡаһы, асылы, үҙлеге менән битәрләүҙе ирең генә түгел, иң яҡын туғаның да ғәфү итмәүе бар...

-Шунан, ағай?

-Шул, һин уның ыңғай сифаттарына йәбешәһең, уларҙы үҫтерәһең. Бер көн килеп ул сифаттар иреңдең төп сифатына әүерелә һәм теге тупраҡ араһында күмелеп ҡалған һабаҡ бөтөнләй онотола...

-Ҡыҙыҡ, ағай, ә бына уның үсегеүен, ҡыҙыу холоҡло булыуын нисек бөтөрөргә?

-Үсегеү - балалыҡ холҡо, шуға күрә нимәләр үсегә башлаһа, уның был ҡылығын һиңә иркәләнергә теләге һымаҡ ҡабул ит һәм уға мөмкин тиклем наҙлыраҡ булырға тырыш...

-Һуң, ағай, мин бит уның кәләше, ул мине үҙе иркәләргә тейеш бит. Иркәләргә, минең һәр бер һораған нәмәмде алып бирергә, күп итеп аҡса табырға тейеш. Шулай түгел икән, нимәгә кәрәк ул сағында миңә ундай ир...

-Һин, һеңлем, бик күп ҡыҙҙарыбыҙҙың хатаһын ҡабатлайһың. Ир кешегә баштан уҡ ҡапыл үтәй алмаҫлыҡ бурыстар йөкмәтергә ярамай...

-Ниңә ярамай?

-Ниндәй генә ир булмаһын, уларҙың береһе лә кәләштең барлыҡ көйһөҙлөктәрен үтәрлек хәлдә булмай. Әгәр ҙә һин уны тағы ла булдыҡһыҙлыкта ғәйепләй башлаһаң, ир кешелә кәмһенеү комплексы барлыҡҡа килә лә, ул биле алынған атҡа оҡшап ҡала...

-Нишләргә һуң улай булғас, ағай?

-Бары тик бер йомошондо ғына әйтергә лә, уны үҙ ыңғайына ҡуйырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта уның был гәмәлде башҡара алыуын иҫенә төшөрөп, маҡтап алырға ла кәрәк...

-Шулай ҙа мин бик ныҡ ҡурҡам, ағай. Уның менән яҙмышымды бәйләп, яңылышманыммы икән тип ҡурҡам...

-Һин, һеңлем, үҙ-үҙеңә ышанмайһың. Шуға шулай уйлайһың...

-Нисек инде ышанмайым, ағай?

-Үҙ-үҙеңә ышанмауыңды кейәү баланың етешһеҙ яҡтары менән ҡапларға тырышаһың. Белгең килһә, бына уның һин һанап киткән кире сифаттарын башҡаларҙа ла табырға була. Был - беренсенән, икенсенән, һин яңылышыуҙан, хаталаныуҙан ҡурҡаһың. Ә бит кеше бер ваҡытта ла хаталанмай...

-Мин һине аңламаным, ағай, яңылышыу, хата тигән төшөнсәләр булғас, яңылышыу ҙа, хата ла булалыр инде ул. Ә кеше ни өсөн хаталанмай тиһең һуң?

-Һин әлеге яҙмышыңдың хата түгеллеген был кейәү менән айырылышып, икенсе менән йәшәй башлағас ҡына аңлай, үҙеңде баһалай алаҫаҡһың...

-Ә ни өсөн быны өсөн фәҡәт икенсе кеше менән йәшәргә һуң, ағай?

-Бая әйттем бит: донъяла абсолют яҡшы йә абсолют насар кешеләр булмай һәм икенсе кейәү менән быныһын сағыштырғас ҡына һин тәүгеңдән айырылып, хата юлға баҫыуыңды аңлаясаҡһың...

-Ышанмайым, ағай, әгәр ҙә икенсе кейәү бар яҡтан да камил, үтә лә яҡшы кеше булып сыҡһа, ул сағында нисек була?

-Һинең бындай иллюзияң оҙаҡҡа һуҙылмаясаҡ. Ни өсөн тигәндә, "Тәүге тормош юлдашы - Хоҙайҙан, икенсеһе - Иблестән" тигән һүҙ бар...

-Шунан?

-Шул. Тәүге иреңдең насар сифаттары, һиңә насар мөғәләмәһе менән Хоҙай һинең ихтыярҙы һынай. Шул һынауҙы күтәрә алмай, яҙмыш юлыңды үҙгәрткәнең өсөн барыбер ҙә нимә менәндер түләргә тура киләсәк һиңә...

-Әгәр ҙә был ирем ғүмер буйына холҡон үҙгәртмәһә, ул сағында миңә ни эшләргә һуң?

-Тимәк, һиңә Хоҙай тарафынан ҡуйылған һынауҙың мөҙҙәте шул тиклем, туғаным...

-Эй, ағай, илатаһың инде...

-Аҙаҡтан иламаҫ өсөн хәҙер илауың хәйерле, туғаным, ила...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Минең кәңәшемде тотто һеңлем. Ихтыяры ла, түҙемлеге лә етте. Яңыраҡ осрашҡан саҡта уның һәм кейәүенең, ике улының шат йөҙҙәрен күреп тынысландым. Был әңгәмәне иҫенә лә төшөрөп торманым. Шулай ҙа ошондай ярҙамға дусар булғандар өсөн тәҡдим итәм был әңгәмәне.**

**Һәйәндәк АҪЫЛОВ.**

✓ *Күсәрбай Аҡсулпанов капитан дәрәжәһендә хеҙмәт итә, 7-се кантон башлығы була. Ул Рәсәйгә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн милләттәштәребеҙ араһында беренселәрҙән булып дворян титулына лайыҡ була.*



*ЗАТЫҢ КЕМ?*

# ТАМЫРҘАРЫН БЕЛГӘНДЕҢ...

## рух көсө арта



**Үҙ тамырҙарынды белеү - һәр кемдең изге бурысы. Ошо бурысын һанлаған һәм уны ғәмәлгә ашырған кеше рухи яҡтан көслө булыуы менән айырылып тора. Һуңғы йылдарҙа шәжәрәләрен төптән өйрәнеүгә, үҙ тамырын барлауға етди ҡараған кешеләрҙең, айырыуса йәштәрҙең күп булыуы иғтибарға лайыҡ. Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһы аспиранты Юлай Кинйәбай улы АҠСУЛПАНОВ та оҙаҡ йылдар ошо юҫыкта эҙләнеүҙәр алып барып, күп кенә мөһим тарихи факттарҙы асыуға өлгәшкән. Һүҙҙе уның үҙенә бирәйек.**

### Шәжәрә - исемдәр теҙмәһе генә түгел

Мин тыуып үҫкән Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы районда иң ҙур башҡорт ауылдарының береһе. Ауылымдың, тыуған яғымдың тарихы һәм үҙемдең шәжәрәм менән ҡыҙыҡһыныуым мәктәптә уҡығанда уҡ тыуҙы. Шул саҡта уҡ атайымдың, олатайымдың, ауыл ҡарттарының һөйләгәндәрен ҡағыҙға теркәп барҙым һәм Өфөгә уҡырға килгәс, һәр ишеткән мәғлүмәтте тикшереп, архивтарҙа ултырҙым. Шул саҡта ҡайһылыр мәғлүмәтте иҫбатлауға өлгәштем, ҡайһыларындыр инҡар итергә тура килде, сөнки ҡайһы бер осраҡта ололарҙан алған мәғлүмәт ысынбарлыҡтан тайпыла, ауыҙҙан-ауыҙға күсеп килгән мәғлүмәттәр төрлө кеше тарафынан төрлөсә аңлана һәм аңлатыла. Тик был, оло-лар һүҙенә ҡолаҡ һалырға ярамай, тигәнде аңлатмай, сөнки улар йөрөгәне бер мәғлүмәти хазина һандығы, белгәндәре менән уртаҡлашырға, тарихты һөйләргә һәр ваҡыт әҙер һәм, иң мөһиме, улар артабан ниндәй юлдан барыу дөрөҫөрәк буласағын аңлатып, кәрәкле йүнәлеш тә биреп ебәрә. Ғөмүмән, ошондай тикшереүҙәр юлында һине алға әйҙәгән, рухландырған кешеләрҙең осрауы эҙләнеү эштәрен аҙағынаса алып барып еткереү мөмкинлеге бирә лә инде. Ә үҙ тамырҙарынды тәрәндән өйрәнергә теләк көслө булһа, алдында торған, йырып сыға алмаҫлыҡ булып күренгән мәсьәләләр үҙенән-үҙе хәл итәлә. Бындай тикшеренеүҙәргә бер тотонған кеше уларҙан тиҙ генә ситкә тайпыла алмай, сөнки был процесс шул тиклем үҙенә ылыҡтыра, һәр бер табылған документ үҙенә күрә бәләкәй генә еңеү тип ҡабул ителә һәм артабан эҙләнеүҙәр алып барыр өсөн көслө стимул булып тора. Бындай тикшеренеүҙәр бары тик айырым бер кешенең генә быуынын асыҡлауға алып килмәй, улар тотош милләт өсөн файҙалы, тип уйлайым, сөнки тикшеренеүҙәр барышында милләттең арҙаҡлы ул-ҡыҙҙары хаҡында күп мәғлүмәт табыла. Шуға күрә төплө генә мәғлүмәт туплағас, быны ғилми эш йәки бәләкәй генә китап итеп, йөмәгәтселек иғтибарына сығарыу мөһим.

### Ҡартатайымдың дворянлыҡ титулы алғаны

Үҙемдең тамырҙарымды юллауым күп кенә асыштарға алып килде һәм уларҙың минең ғаиләмә генә түгел, ә тотош ауылым тарихына бәйле булыуы мине ныҡ тетрәтте. Шулай, шәжәрәмде өйрәнгән саҡта 18 быуатта ғүмер иткән ҡартатайымдың исеменә барып юлыҡтым һәм ауылыбыҙҙың нәҡ уның исемен йөрөткәнлеген асыҡланым. Билдәле булыуынса, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы 18 быуатҡа тиклем Аҡсулпан тип аталған, ә Аҡсулпан тигән шәхес үҙе, шәжәрә буйынса, 17 быуаттар тирәһендә йәшәгән булырға тейеш. Күсәрбай Аҡсулпандың ейәне, ә улар араһында тағы ла биш быуын бар. Шулай булғас, ауыл тарихы 17-се быуатҡа барып тоташа, тип фаразлай алабыҙ. Тыуған ауылыма ҡартатайым нигеҙ һалыуын белгәс, мин тағы ла ныҡыраҡ рухланып киттем һәм тарихты артабан тағы ла төплөрәк өйрәнергә тотондом. Тарихи документтарҙан мин ҡартатайымдың уларҙы менән бергәләп 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашыуын белдем. Билдәле булыуынса, был йылдар тарихҡа фажиғәле ваҡиғалары менән инеп ҡалған. Мәскәү француз илбаҫарҙары ҡулына ҡалғас, батша яҙҙам һорап башҡорттарға мөрәжәғәт итә. Милләттәштәребеҙ Рус дәүләтенең намыҫын, азатлығын яҡлап, барлығы 28 полк ойоштора. Ул полктарҙа хеҙмәт итеүселәр араһында минең ауылдаштарым, ҡартатайҙарым да бар. Улар - Күсәрбай Өмөтбай улы һәм Аралбай Күсәрбай улы Аҡсулпановтар. Улар үҙҙәрен



ҡыйыу һуғышсы итеп таныта. Аралбай Аҡсулпанов батша тарафынан 4-се дәрәжә "Изге Анна" ордены менән бүләкләнә. Ә Күсәрбай Аҡсулпанов капитан дәрәжәһендә хеҙмәт итә, 7-се кантон башлығы була. Күсәрбай Аҡсулпанов Рәсәйгә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн милләттәштәребеҙ араһында беренселәрҙән булып дворян титулына лайыҡ була. Ошо исемде биргән грамотаны табыу бәхетенә ирештем һәм әлеге көндә уның күсермәһе ауыл мәктәбендә һаҡлана.

2012 йылда 1812-1814 йылдағы Ватан һуғышында еңеүгә 200 йыл тула. Шул айҡанлы Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев указы буйынса оло саралар үткәреү ҡаралған. Ошо ваҡиғалар шауҡымы шундай батырҙары булған Күсәрбай ауылын да, республиканың башҡа ошондай ауыл-ҡасабаларын да урап үтмәскә тейеш. Был һуғышта ҡатнашҡан милләттәштәребеҙҙең, батырҙарыбыҙҙың ҡаһарманлығын мәңгеләштереү беҙҙең изге бурыс икәнен онtorға ярамай. Уларҙың исеме халыҡҡа киң билдәле булырға тейеш, сөнки беҙ халҡыбыҙҙың бай тарихына ҡарап илһамланабыҙ, рухланабыҙ. Ә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарынан, шәхестәренән өлгө алып йәшәһәк, күпкә өлгәшәсәкбеҙ икәнлегенә иманым камил. Нисек кенә булмаһын, кеше тыуған тупрағынан, ата-бабалары рухынан көс-ҡеүәт ала, әгәр ҙә инде ошо бәйләнеш өҙөлһә, был бер кеше йә бер ғаилә, ауыл өсөн генә түгел, барлыҡ милләт өсөн трагедия.

### Батырҙарҙың ҡәберен бел!

Ауылыбыҙ зыяратында 1812-1814 йылғы һуғышта ҡатнашҡан батырҙарыбыҙҙың ерләнгән урындары ла бар, тип фаразларға мөмкин. Ауылыбыҙ барлыҡҡа килгәндән алып бөгөнгө көнгә тиклем зыярат бер ерҙә урынлашҡан һәм унда боронғо дәүергә ҡараған кәшәнәләрҙе, төрки телдә яҙылған ҡәбер таштарын осратырға мөмкин. Был ҡәберлектәр хаҡында мәғлүмәттәр һауанан алынмаған, ауыл ҡарттарының һөйләгәндәре Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы ғалимдары тарафынан раҫланған, тип әйтергә була, сөнки академиянан бер төркөм ғалимдар килеп, ҡәберлектәрҙе өйрәнде һәм был ҡәберлектәрҙең, ысынлап та, ошо дәүергә тура килеүе билдәләп үтелде. Был ҡәберлектәрҙә, ғөмүмән, ауылыбыҙҙың күренекле батырҙары хаҡында телдән-телгә күсеп килеүсе мәғлүмәттәр бар. Ләкин быға тиклем улар хаҡында йәмәғәтселеккә киң билдәле булманы. Быйың сәбәбе билдәле инде: совет осоронда дворяндар тоҡомдарына ғына түгел, тотош милләт тарихына етерлек иғтибар булманы.

Әйткәндәй, яныраҡ Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылында Юлай Аҡсулпанов тәҡдиме менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының тарихи шәхестәрҙең исемен мәңгеләштереү һәм тәбиғәт һәйкәлдәрен һаҡлау буйынса күсмә ултырышы үтте. Ултырышта ҡатнашҡан Башҡарма комитет ағзалары ауылдың киләсәге өсөн үтә әһәмиәтле ҡарар ҡабул итте. Ҡарарҙа Күсәрбай ауылы тарихын, билдәле шәхестәрҙе, иҫтәлекле урындарҙы өйрәнеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы белгес-эксперттарын саҡырыуҙы, 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышы батырҙары Аралбай һәм Күсәрбай Аҡсулпановтарҙың исемен мәңгеләштереү йәһәтенән уларҙың тыуған ерендә мемориал-һәйкәл комплексы булдырыуҙы, ауыл мәктәбенә Күсәрбай Аҡсулпанов исемен биреүҙе юлларға, шулай уҡ Стәрлетамаҡ районы хакимиәтенә Ҡуғанаҡ йылғаһы аша күпер һалыуҙы, иҫке зыярат тирәләй дамба төҙөүҙе, ауылда төпләнергә теләгән йәштәргә йорт һалыу өсөн ер бүлеүҙе һорап мөрәжәғәт итергә, тигән пункттар бар.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА**
**яҙып алды.**



**Телебеҙҙе ғилми яктан иң тәүгеләрҙән булып өйрәнеп, баһалап бөткөһөҙ ҙур хеҙмәт башҡарған Н.К. Дмитриев башҡорттоң үҙ тел үҙенсәлектәренә бик һаҡсыл, ихтирамлы ҡарауын, һәр бер хата әйтелеште игтибарһыҙ ҡалдырмауын аптырап һәм һоҡланып билдәләп ҡуйған. Ысынлап та, әле бынан 40-50 йылдар элек кенә ситтәрҙә йөрөп ҡайтҡандарҙың тел һәм телмәр хаталарына, ауылса һөйләшеүҙән тайпылыуына ололар, шунда уҡ иғтибар итеп, мотлаҡ төҙәтеп һәм төҙәттереп ҡуйыр ине. Телебеҙ сафлығына битараф булмаған ололар ауылдарҙа әле лә осрай. Шундай уҡ сифаттарға эйә йәштәребеҙҙең дә күренеп-күренеп ҡалыуы телебеҙ киләсәгенә, уның артабанғы яҙмышына өмөт уята.**

# ТЕЛ БӘҪЕ,

## йәки Һыйырҙы эйәрләйҙәрме, кәзәне йүгәнләйҙәрме?



### Телебеҙҙе һаҡлаусы өндәр

Минең үҙемә иң бөйөк шәхестәребеҙҙең береһе Зәки Вәлидиҙең, халҡыбыҙ тарихындағы ауыр, ҡурҡыныс дәүерҙәрҙә лә күңел төшөнкөлөгөнә, өмөтһөҙлөккә бирелмәйенсә, форсат асылыу менән аяҡҡа баҫырыбыҙға ышаныс менән йәшәргә кәрәк, тигән үтә лә мөһим фекере бик оҡшай. З. Вәлидиҙең, оптимист булып ҡалырға кәрәк, тигән өндәүе тел яҙмышына ла туранан-тура ҡағыла. Йырҙа әйтелгәнсә, "Тел бөтмәһә, ил бөтмәҫ".

Һәр бер телдең үҙаллы, айырым тел була алыуы уның фонетик, лексик, грамматик, интонацион үҙенсәлектәренә, йәғни башҡа телдәрҙән әлеге яҡтары менән айырылып тороуына бәйләнгән. Шөкөр, башҡорт теле һәр бер йүнәлештә тик үҙенә генә хас үҙенсәлектәргә бай. Фонетик айырмаларҙы ҡарайыҡ. 40-лаған төрки теле араһында тик башҡорт телендә генә үҙ һүҙҙәребеҙҙә һ өнө бар. **Ҙ** һәм **ҫ** өндәре лә тик беҙҙә генә. Башҡорт теле генә ялғауҙарҙың фонетик күп төрлөлөгө менән айырылып тора. Башҡорт теле һөйләштәрендә генә орхон-йәнәсәй яҙмаларындағы **нт, мт, нҡ, мҡ** өн бәйләнештәре һаҡланған. Беҙҙең үҙебеҙгә генә хас һөйләү интонацияһы бар. Бөрйән, Белорет, Баймаҡ, Хәйбулла районы ауылдарында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләшеүҙәрен иғтибарлап тыңлап ҡарағыҙ әле. Үҙебеҙҙең борондан килгән саф интонациябыҙ!

Бөгөнгө теле-, радиотапшырыуҙарға тап шул интонацияның килеп инеүе өсөн шул яҡтарҙан сыҡҡан журналистарға рәхмәт әйтәбеҙ. Башҡорт театрҙары сәхнәләренән спектаклдәрҙең дә саф башҡорт телендә барыуы, интонацияларыбыҙҙың һаҡланыуы тыңлаусыларҙы, ҡарауысыларҙы кинәндерә. Юғиһә, бынан 30-40 йылдар элек йәнле башҡорт теленән шаҡтай алыҫ торған "башҡырт" теле сәхнәләрҙең теле ине бит.

Шул ваҡыттарҙан һаҡланып ҡалған ҡайһы бер кире күренештәргә айырым туҡталып китә. Улар күберәк фонетика һәм лексикаға ҡарай. Мәҫәлән, башҡорт телендә тәүге ижектә **а** өнө **а** булып әйтелә, ә **оа** түгел. Беҙҙең телебеҙҙең нормаһына ярашлы, а өнө (шулай уҡ **ә** өнө лә) фәҡәт икенсе, өсөнсө ижектәрҙә генә бер аҙ иренләшә ала. Тик бының өсөн тәүге ижектә (йә ижектәрҙә) **о** йәки **ө** өнө булыуы шарт. Мәҫәлән, тома**н**, көрә**к**, олат**а**й. Алдағы һүҙҙәрҙә ҡалын хәреф менән бирелгән һуҙынҡылар бер аҙ иренләшә. Ысынлап та, **то-ман**, **та-ман** һүҙҙәрендәге икенсе ижектәге **а** әйтелеше яғынан бер иш түгел. Ләкин беҙ, был айырмалыҡты махсус иғтибар итмәһәк, ишетмәйбеҙ ҙә. Ә бына тәүге ижектәге **а** өнөн иренләштереү татар теленең йоғонтоһонда беҙҙең телебеҙгә лә килеп ингеләй. Башҡорт теленең нормаһы буйынса, ***бала***, ***Баймаҡ***, ***алма*** кеүек һүҙҙәр нисек яҙылған, шулай әйтелә, ә ***боала***, ***Боаймаҡ***, ***оалма*** тип иренләштереү башҡорт теленең үҙенсәлеге түгел.

Башҡорт телендә һүҙ баҫымы һуҙынҡының сифатын үҙгәртмәһә лә (мәҫәлән, урыҫ телендәге кеүек), баҫымдың дөрөҫ ҡуйылыуы тел үҙенсәлеге өсөн, уның бәсен ебәрмәҫ өсөн бик тә әһәмиәтле.

Беҙҙең үҙебеҙгә генә хас һөйләү интонацияһы бар. Бөрйән, Белорет, Баймаҡ, Хәйбулла районы ауылдарында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләшеүҙәрен иғтибарлап тыңлап ҡарағыҙ әле. Үҙебеҙҙең борондан килгән саф интонациябыҙ! Бөгөнгө теле-, радиотапшырыуҙарға тап шул интонацияның килеп инеүе өсөн шул яҡтарҙан сыҡҡан журналистарға рәхмәт әйтәбеҙ. Башҡорт театрҙары сәхнәләренән спектаклдәрҙең дә саф башҡорт телендә барыуы, интонацияларыбыҙҙың һаҡланыуы тыңлаусыларҙы, ҡарауысыларҙы кинәндерә. Юғиһә, бынан 30-40 йылдар элек йәнле башҡорт теленән шаҡтай алыҫ торған "башҡырт" теле сәхнәләрҙең теле ине бит.

### Ике хата

Радио, телевидение телендәге баҫымға бәйле иң йыш ҡабатланған ике хатаны ҡарайыҡ әле. Башҡорт телендә күплек ялғауы (***-лар***, ***-ләр***) һәр ваҡыт баҫымлы була. Исемдәрҙең күплек ялғауында баҫым хатаһы ишетелгәне юҡ. Ә бына ҡылымдарҙың хәҙерге заманында күплек ялғауҙарына баҫым төшөрмәйенсә әйтеүҙе ҡайһы берәүҙәр беҙҙең телебеҙгә индерәме индерә: ***килә'ләр***, ***йөрө'йҙәр***. Ләкин башҡорт теленең орфоэпик нормаларына ярашлы, баҫым был осраҡта ла ялғауға төшөргә тейеш: ***киләлә'р***, ***йөрөйҙә'р***.

Тағы ла бер йыш ҡабатлана торған баҫым хатаһы юҡлыҡ ялғауҙары менән бәйле.

Дәреслектәрҙә, юҡлыҡты белдереүсе ***-ма***, ***-мә*** аффикстары баҫымһыҙ була, һәм баҫым улар аша үтмәй, тигән ҡағиҙә бирелә килә. Ысынлап та, күпселек осраҡта был шулай. Ләкин һәр бер ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе (***-ләре***) була. Был осраҡта ла бар. Юҡлыҡ ялғауҙарының ***-маҫ***, ***-мәҫ*** формаһы баҫымлы була, әгәр артабан I-II зат эйәлек, хәбәрлек ялғауҙары килмәһә, баҫым артабанғы ижектәргә лә күсә. Йәғни, дөрөҫө, ***бөтмә'ҫ - төкәнмә'ҫ*** (***бө'тмәҫ - төкә'нмәҫ*** түгел), ***ҡарамаҫта'н*** (***ҡара'маҫтан*** түгел), ***ҡайтма'ҫһың*** (***ҡа'йтмаҫһың*** түгел), ***йөрөмәҫкә'*** (***йөрө'мәҫкә*** түгел), ***әйтмәҫкә'*** (***ә'йтмәҫкә*** түгел). Был ялғауҙың ҡыҫҡартылған варианты ла баҫымлы була, ***ҡайтма'м*** (***ҡайтма'ҫмын***), ***ҡайтма'быҙ*** (тулы формаһы: ***ҡайтма'ҫбыҙ***).

***А*** өнөнөң ***оа*** булып әйтелеүе, ҡылымдарҙа ҡайһы бер күплек ялғауының баҫымһыҙ булыуы татар телендә норма иҫәпләнә. Бер телдең нормаһын икенсе телгә күсерергә тырышыу шул икенсе телдең үҙенсәлектәрен бөтөрөүгә килтерә. Ә алда әйткәнебеҙсә, тел үҙенсәлектәре генә телдең һаҡланыуын тәьмин итә ала. Бер телде икенсе телгә игәп, ҡайраҡлап торһаң, ана шул үҙенсәлектәр шымарып юҡҡа сыға ла ҡуя ул. Ассимиляция тип атала был әйбер.

Үрҙә әйтелгән хаталарҙы радио һәм телевидение көнөнә йөҙәрләп, меңәрләп тиражлап тора. Һөҙөмтәлә, тәүҙәрәк ҡолаҡты ярған хаталар, мең тапҡыр ишетелгәндән һуң, тыңлаусыларҙы күндерә, үҙе ишетелмәҫкә әүерелә, хатта нормаға ла әйләнеп китеүе бар.

### Мышарға йырҙы кем яҙыр?

Тел - беҙгә Хоҙай биргән иң ҙур, иң ҡәҙерле бүләк ул. Халҡыбыҙ шуға ла уны һөйөп, яратып, меңәр йылдар буйы күҙ ҡараһылай һаҡлап, һәр һүҙен юғалтмаҫҡа тырышҡан. Ә бына 20-се быуаттың икенсе яртыһында йөҙәрләгән башҡорт һүҙе икенсе телдәрҙән ингән атамаларға алмаштырылды. Иң ғәжәбе уның шунда: был алмаштырылған һүҙҙәр, үҙ телебеҙ эсендә үгәйһетелеп, бәғзеләре тупаҫ лексика дәрәжәһенә төшөрөлдө. Мәҫәлән, шағирҙарыбыҙҙың береһе, ***мышар*** һүҙе менән шиғыр яҙыу булмай ҙа инде, тип аптыраҡайны. Ҡасандыр ***муйыл*** һүҙе лә ***шоморт*** һүҙенә алмаштырылғайны. Йәнәһе, шиғыр өсөн ***шоморт*** һүҙе генә бара булып сыға. Силәбе шағиры Рамаҙан Шағалиевтың "Һин ултыртҡан муйыл" шиғырына Әбделғәфи Хәлфетдинов яҙған популяр йыр шулай ҙа ***муйыл*** һүҙенә телдә үҙ урынын һаҡлап ҡалырға ярҙам итте. ***Мышар*** һүҙе лә шундай бер елкенеүҙе көтөп ята, ахыры. Түбәндәге һүҙҙәрҙе үҙебеҙ үк үҙ телебеҙҙән ситләткән, ситләтә башлаған, ситләтергә маташҡан һүҙҙәр тип атарға мөмкин: ***ҡаҙаяҡ*** (***абаға*** һүҙе менән алмаштырыла) - папоротник, ***йөкмәтке*** (***эстәлек***), ***тубыҡ*** (***теҙ***), ***тоҡ*** (***ҡапсыҡ***), ***ауырыу*** (***сирләү***), ***йүнәлеү*** (***терелеү***), ***ҡолау*** (***йығылыу***), ***егәрле*** (***уңған***), ***үтә*** (***уҙа***), ***нәҙек*** (***нескә***), ***ҡыбырлай*** (***ҡыймылдай***), ***һөрөнә*** (***абына***), ***ялҡыу*** (***еләтеү***), ***ҡасау*** (***өтөргө***), ***йүткереү*** (***йүтәлләү***), ***алйот*** (***иҫәр***), ***һөйрәү*** (***өҫтөрәү***), ***күтәрмә*** (***болдор***), ***һиуһау*** (***кибегеү***), ***төртөү*** (***этәреү***), ***инеү*** (***кереү***), ***туҡал*** (***мүклә***к) һ.б.

Тағы ла ***йыбытҡы*** (ялҡау, эшлекһеҙ, һәпрә, әрпеш), ***һары һыу*** (ҡар иреү һөҙөмтәһендә йә ямғырҙан һуң аҡҡан һыу), ***тәләкәсе*** (шаяртып, төрттөрөп һөйләшергә яратыусы) кеүек бик тә үҙенсәлекле һүҙҙәр бөгөн пассив лексикаға инеп китеп бара.

### Иреүме, эреүме?

Һүҙҙең бер-ике өнөн үҙгәртеп ебәреү ҙә телебеҙҙең бәҫен ебәрә. Һуңғы ваҡытта башҡорт теленең үҙенә генә хас булған ***иреү*** һүҙе юғалып барған кеүек. Уның урынына ***эреү*** тип кенә ебәрәләр. Башҡорт телендә ***иреү*** ҙә, ***эреү*** ҙә бар. Тик уларҙың мәғәнәләре бер-береһенән принципиаль рәүештә айырыла. ***Иреү*** -ҡаты, туң хәлдән шыйыҡ, йомшаҡ хәлгә килеү: ***ҡар иреү, май иреү, йөрәк иреү, күңел иреү***. ***Эреү*** - предметтың сифаты үҙгәреүе, урыҫса "свертывание", ***һөт эреү***.

Ошо ыңғайҙан, башҡорт теленең омонимияны үҙ итмәүен иҫкә төшөрәйек. Күп мәғәнәле һүҙҙең мәғәнәләре ғәҙәттә бер-береһенә ныҡ яҡын була. Мәҫәлән, ***морон*** - эт мороно, тау мороно, кәмә мороно, сәйнүк мороно. Әгәр мәғәнәләр бер-береһенән ныҡ ҡына айырыла башлаһа, һүҙ, өн составы бер аҙ үҙгәреп, яңы һүҙгә нигеҙ һала: ***бәгер - бауыр - бөйөр, туған - тыуған, ырғыу - урғыу, тары - дары, йырыу - ярыу, тыныу - тоноу, һырыу - һарыу, һурыу - һүреү, һыпырыу - һепереү, йүгереү - юртыу*** (***юғыртыу***). ***Иреү*** менән ***эреү*** ҙә ошондай һүҙҙәр затынан.

### "Йәшләй йөрең" - мәғәнәһеҙлек

Йыр текстарына һәм йырсылар теленә ҡарата бер-ике һүҙ әйтке килә. Һәр бер телдәге кеүек үк, башҡорт телендә лә бер һүҙҙе икенсеһенә бәйләй торған, бәйләй ала торған ҡағиҙәләр бар. Һыйырға эйәр һалып йәки ат ҡамытын кейҙереп булмаған кеүек, телдә ниндәй ике һүҙҙе бер-береһенә тота килеп бәйләп булмай. Рәүеш күберәк ҡылымдарға, сифат исемгә бәйләнә. Бер йырҙа *"Бәхет - йәшләй йөрең менән тиң ғүмер итеүҙәре"* тигән юлдар бар. ***Йәшләй*** - ул рәүеш. Уның аҙағына ҡылымды ғына ҡушып була: ***йәшләй һөйгән, йәшләй өйрәнде*** һ.б. Ә ***йөрең*** - әлбиттә, исем. Уның алдынан, ғәҙәттә, сифат, сифат ҡылым, исем килә. Шуға ла ***йәшләй йөрең*** түгел, ә ***йәшлек йөрең, йәшләй һөйгән йөрең*** һ.б. булырға тейеш. Ошоға оҡшаш миҫалдарҙы, йәғни һыйырҙы һыбайлаған, кәзәне йүгәнләгән һүҙбәйләнештәрҙе хәҙерге йыр текстарынан күпләп табып була. Бер көнләк йырҙарҙа бындай хаталарҙың булыуы артыҡ ҡурҡыныс түгел. Уны берәү ҙә хәтерендә лә ҡалдырмай, иғтибар итеп тә бармай. Ә бына көйө күңелгә ятып, йыр популяр булып китһә, әлеге хаталар йәштәр теленә, телмәренә кире йоғонто яһамай, тип әйтеп булмай.

### Йомғаҡлап ҡуйыйыҡ...

Телебеҙҙең матурлығын, һығылмалылығын һаҡлау, уның бәҫен ебәрмәү бөгөн фәҡәт үҙебеҙҙән тора. Тик һәр кемдең уға ғәлсәр һауыҡта ҡараған кеүек һоҡланып, уны ҡәҙерләп, һаҡлап, яҡлап, саң-туҙанын һөртөп тороуы ғына шарт.

**Вәкил ХАЖИН,**
**педагогия фәндәре кандидаты.**

✓ *Ауылға ҡайтҡанда бер ҡулға шул магнитофонды, икенсеһенә матур дипломат тотоп, башҡа ҡалпаҡ кейеп ҡайтып төшөүем үҙе бер сағыу ваҡиға булды. Хәҙер генә беҙҙең иҫ китмәй, ул осорҙа был хәл коммунизмға торошло ине.*



ХӘТЕРКИТАП

**Быйыл кешенең беренсе тапҡыр йыһанға осоуына 50 йыл да булып китте. Беҙҙең өсөн байтаҡ ваҡыт һымаҡ, ә бөтә ғаләм иҫәбенә һалһаҡ, бер мәл генә. Кешелек ни өсөн һәр ваҡыт күккә ынтылалыр, уныһын аңлата алмайым, ләкин "һомо-сапиенс", йәғни "аңлы кеше" булып үҫешеп еткәне бирле, күкте яуларға хыяллана ул. Унда нимә эҙләйҙер ҙә, ерҙә ни етмәйҙер уға? Һуңғы 60-70 йыл эсендә был юҫыҡта ҙур алға китеш күҙәтелә: йыһанға сыҡтыҡ, Айға аяҡ баҫтыҡ, Алла бирһә, яҡын арала Марсҡа ла ынтылырға торабыҙ... Ошоларҙы уйлағас, "Был масштаблы эштәрҙә минең дә, аҙ булһа ла, өлөшөм бар бит", тигән ғорурлыҡ тойғоһо уянып ҡуя. 1985 йылда эш сәфәре менән миңә лә "Байконур" космодромында булырға тура килгәйне.**

# КЕШЕ НИҢӘ КҮККӘ ЫНТЫЛА?

## Йәғни Байконурҙа үткәргән 365 көн тураһында




### Сәйәхәт шулай башланды

Ул мәлдә Силәбе ҡалаһында ябай электромонтажсы булып эшләй инем. "Байконур"ға эшкә ебәреү өсөн беҙҙән анкеталар тултырттылар ҙа, уларҙы Мәскәүгә ебәрҙеләр. Бик ныҡ һайланылар: "Сит илдәргә һөрөлгән, йә үҙ теләге менән илдән сығып киткән туған-тыумасағыҙ бармы?", "Хөкөм ителгәнһеңме, юҡмы?" - барыһын да тикшерҙеләр, ғаилә хәлендә лә теркәнеләр. Анкеталарҙы оҙатып, бер йыл самаһы ваҡыт үткәндән һуң, беҙгә саҡырыу ҡағыҙы килеп төштө. Күп тә үтмәй, Байконурға юлландыҡ. Беҙҙе, эшселәрҙе, унда үҙебеҙҙең вәкил, тағы бер-нисә кеше һәм хәрбиҙәр ҡаршы алды. Машинаға ултыртып, тура "2-се майҙансыҡ"ҡа алып килделәр. Ю. Гагарин ошонан осҡан, тип аңлаттылар.

Космодром биләп ятҡан ерҙәр республикабыҙҙың ҙур ғына бер районы ише барҙыр - территорияһы бик алыҫтарға йәйелгән. Беҙ йәшәй торған ҡаласыҡ силикат кирбестәрҙән төҙөлгән бараҡтарҙан тора ине. Һәр бараҡты өс һалдат тәрбиәләп тота. Береһе, дәрәжә буйынса өлкәнерәге - бараҡтың коменданты, ә ҡалған икәүһе - эске тәртип өсөн яуап биреүсе "дневальный"ҙар. Беҙҙең һалдаттарҙың өсөһө лә үзбәк милләтенән булып сыҡты. Беҙҙе йылы ҡаршы алдылар, үҙ иттеләр. Йорттар тышҡы яҡтан ҡойто ғына күренһә лә, эстән яҡшы йыһазландырылған. Һәр бүлмәгә берәр кондиционер ҡуйылған. Йәйге эҫелә улар бер нигә алыштырғыһыҙ кәрәкле ҡорамал булып сыҡты.

### Йыһан караптарын осорғанды ла күрҙек

Урынлашыуыбыҙҙың иртәгәһенә "Буран" комплексын хеҙмәтләндереү маҡсатында төҙөлә башлаған "Монтажлау-заправкалау комплексы" (МЗК) тигән бик ҙур ҡоролмаға килтерҙеләр. Һәүетемсә эш башланыҡ. "Буран" үҙе бынан алыҫ булмаған бер майҙансыҡта вертикаль хәлдә тора. Телевизорҙан да уны бөгөн шул килеш күрһәтәләр. Объект ниндәй генә серле булмаһын, ә ракеталарҙың ҡасан, ҡайһы майҙансыҡтан осоролорон көн элгәре үк белә инек. Ул саҡта эштәрҙе туҡтаталар, бөтәһенә лә тышҡа сығырға ҡушалар. Беҙ үҙебеҙҙең МЗК-ның 45 метр бейеклегендәге майҙансығына күтәрелеп, ултырышабыҙ ҙа, уҫ төбөндә генә кеүек күренгән ракетаға текәләбеҙ. Тулҡынландырғыс минуттар етә... Тәгәйен ваҡытта тәүҙә ракетаның аҫҡы өлөшөн саң баҫа, уты күренмәй әле, күрәһең, ут өрә торған соҡоро бик тәрәнгә китәлер; шунан ракета яйлап ҡуҙғала башлай, ниһайәт, тәлкә ҡойроғо кеүек сағыу-ҡыҙғылт уты күренә. Ракетаның тиҙлеге артҡандан-арта барып, һул яҡҡа ауышайыңҡырап, бер булкәтенән арынып, күҙҙән дә юғала. Ярты йыл эсендә байтаҡ ракеталарҙы оҙатып ҡалырға тура килде, ә барыбер һәр осош мауыҡтырғыс. Беҙ эшләгәндә космонавт Джанибеков ике тапҡыр йыһанға барып ҡайтты, берещендә ин оло космонавтыбыҙ - Гречко менән бергә осто. Ул мәлдә Гречко оло ғына йәштә ине. Джанибеков үҙе бөтәһе биш тапҡыр йыһанға күтәрелде.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙ хеҙмәт иткән "Буран"дың бураны тиҙ тымды. 2002 йылда телевизорҙан "Монтажлау - һынау комплексы"ның (МИК) түбәһе ишелеп, уның емереклектәре аҫтында ҡалыуы тураһында хәбәр иттеләр. МИК-тың габариттары беҙ төҙөгән МЗК-ныҡына тап килә. Әгәр МИК-тигәнебеҙ элекке МЗК булһа, бигерәк аяныс - беҙ "Буран"ға ҡәбер әҙерләгәнбеҙ булып сыға бит. "Буран"-дың осҡанын күрергә тура килмәне - ул мәлдә 1985 йыл ғына ине, белеүебеҙсә, бер данала ғына төҙөлгән "Буран" комплексы һауаға бер мәртәбә - 1988 йылда ғына күтәрелгәйне. Был хаҡта йәш быуын, бәлки, белмәйҙер ҙә. Бер фильмда М. Пуговкин геройы тарафынан әйтелгән: "Беҙҙең космос караптары йыһан киңлектәрен "һөргән" саҡта..." тигән һүҙҙәргә үҙебеҙҙән өҫтәп: "Беҙ уларҙы үҙебеҙ оҙатып ҡала инек", - тип яуап бирергә булыр ине.

### Шығырҙатып ҡом ашаныҡ...

Йәшеллеккә күмелгән Уралдан ҡомлоҡҡа барып эләгеүе лә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Бөтә ерҙә сүллек, ел сыҡһа, унан һаҡланырмын тимә. Ашханаға инһәң, ҡомло ризыҡ һалып бирәләр, ашарға тура килә, ҡалай итәһең. Тышҡа сыҡһаң, шул уҡ ҡом күҙгә, танауға тула. Һөйләшһәң, ауыҙға инеп йонсота. Шуға ҡарамаҫтан ҡомлоктоң да бер матур мәле бар - яҙ етеп, тирә-яҡтың ләлә сәскәләренә күмелгән сағы. Бер-ике көндә ерҙе ләлә ҡаплап ала, аяҡ баҫырлыҡ та урын ҡалмай. Был сәскәнең тамыры бик тәрәнгә китә икән - ҡыҙыҡ өсөн береһенең төбөн 60 сантиметр тирәһе тәрәнлеккә ҡаҙып ҡараным, әммә барыбер тамырының осона етә алманым. Ара-тирә дөйә сәнскәктәре осрай, ғибрәт өсөн әйтергә кәрәк, ул үҫемлеккә беҙгә сәй урынына һалып бирәләр ине. Тәме маҡтанырлыҡ уҡ булмаһа ла, ҡайнамаған һыуҙан яҡшыраҡ барыбер. Һыуҙы ҡайнатмайынса эсергә ярамай, югиһә, дизентерия ауырыуы йөҡтороп ҡуйыуың бар. Был ҡағиҙәне тотмаусылар оҙаҡламай госпиталгә эләгә торҙо. Минә лә бер аҙ дауаланып сығырға тура килде, әлеге лә баяғы, үҙ һаулығыма ҡарата ниндәйҙер кимәлдә битарафлыҡ арҡаһында. Шуныһы ғәжәп, офицерҙы ла, ябай һалдатты ла, башҡа кешеләрҙе лә бер генә дарыу менән - левомицетин ярҙамында дауалайҙар, аҙна-ун көн эсендә тулыһынса һауығып сығалар.

Хайуандарҙан ишәк, дөйәләрен күп күрҙек. Көтөүсеһеҙ үҙ йәйына йөрөп тамаҡ туйҙыралар. Егеттәр бер мәл 20-30 см тирәһеләй варан тотоп алып ҡайтты. Бараҡтың иҙәненә ебәргәйнеләр, тегенең тәпәйҙәренә күҙ эйәрмәй инде бына! Йәшәгеһе килә шул мәхлүктең. Гөбөргәйелдәр ҙә бар тиҙәр ине, уларын күрмәнем. Ә бәләкәй генә, йомран ҙурлыҡ булалыр, ялмандарын (тушканчик) һанап бөтөргәнһеҙ күп күрҙек. Бигерәк тә аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары булған ерҙә күп үҙҙәре.

### Әллә һаман барымта-ҡарымтамы?

Халҡына килгәндә, беҙҙәгенән әллә ни айырылмай. Беҙҙең урыҫтар башҡортса нисек шытырлатып һөйләшһә, уларҙа ҡаҙаҡса шулай сирттерәләр. Телевизорҙағы бөтөн фильмдар ҙа урындағы халыҡ теленә тәржемә ителгән. Штирлиц тураһында кино бара ине, беҙ үҙ-ара: "Штирлиц ҡаҙаҡса ла белгән икән!" - тип, көлөшәбеҙ...

Ҡаҙаҡтар үҙҙәре бик ихлас, алсаҡ халыҡ, оялып, тартынып торғандарҙан түгелдәр. Тик, ниңәлер, минең менән һөйләшкәндә артыҡ асылып барманылар. Әллә борон башҡорт менән ҡаҙаҡ араһында барған барымта-ҡарымта мөнәсәбәттәре һаман һағайырға мәжбүр итәме уларҙы, аңлап етә алманым...

### Ҡаласыҡта - коммунизм!

Космодромдың үҙенең ыҡсым ғына тимер юл станцияһы ла бар. Исеме Байконур түгел, ә Тюра-Там. Бер рәсми картала ла күрһәтелмәгән был станцияға ял көнө барыу өсөн алдан ғариза бирәбеҙ, шунһыҙ һалдаттар аша үтеп булмай - ныҡ һаҡлайҙар. Башҡортостандағы ҡытлыҡ менән сағыштырғанда унда бөтә нәмә лә бар: "Днепр", "Урал" мотоциклдарын бер ниндәй сиратһыҙ, исемлекһеҙ алырға була, бөтә СССР-ҙа ҡытлыҡ булған ҡарабойҙай ҙа кәштәләрҙә тулып ята, ҡуйыртылған һөт, ыҫланған колбасаларҙан аҙыҡ-түлек кәштәләре һығылып тора, хаҡтары ла килеп тороп осһоҙ. Мин үҙемә "Романтик" магнитофоны һатып алдым. Ауылға ҡайтҡанда бер ҡулға шул магнитофонды, икенсеһенә матур дипломат тотоп, башҡа ҡалпаҡ кейеп ҡайтып төшөүем үҙе бер сағыу ваҡиға булды. Хәҙер генә беҙҙең иҫ китмәй, ул осорҙа был хәл коммунизмға торошло ине.

Байконурҙа эшләп ҡайтыуға хәҙер инде 26 йыл үтеп киткән, ә хәтирәләр бигерәк сағыу, кисәге көн һымаҡ ҡына һаҡлана. Был йыл эсендә Байконурҙа космонавтарҙы йыһанға оҙатып ҡалыуҙар, экскурсияларға алып йөрөтөүҙәре, эш хаҡының да насар булмауы, бай магазиндарҙа теләгән нәмәңде һатып алыу мөмкинлеген һанағанда, космодромдың ҡомлоҡта ғына түгел, ә тотош ил эсендәге оазистарҙың береһе булыуы тураһында һығымта яһарға була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеше ни өсөн күккә ынтыла? Был һорау мине генә түгел, әле бик күптәрҙе тулҡынландыра. Минеңсә, кешелек ғәләмдә үҙе һымаҡ йән эйәләрен эҙләү маҡсатында йыһан гиҙә. Яңғыҙлыҡ Аллаға ғына килешә, тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер, үҙенең яңғыҙ түгеллеген иҫбат итеү өсөн осмаймы ни кешеләр йыһанға?**

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы.**

✓ *Килендең битен асыу йолаһы күрһәтелә. Егеттең ағаһы ҡамсы һабы менән яулыҡ осон күтәрә. Барыһы ла киленде күреп: "Собханалла!" - ти. Ағай кеше: "Айыры тояҡ киленгә!" - ти. Ошонан һуң киленгә теләк әйтеү башлана.*



*КОНКУРС*

# ИР РӘХӘТЕНӘ КИНӘН,

## донъяң булһын теүәл!



**Йәштәр туй үтә торған залға инер алдынан ҡолға күтәргән бер йәш егет "Туй килә! Туй килә!" тип ҡысҡырып, ҡунаҡтар араһында йөрөй. Ҡолғаға бүләктәр бәйләнә: таҫтамал, ҡулъяулыҡтар һ.б. (улар һуңынан уйындарҙа уйнаусыларға бүләк итеп таратыла).**

**Ҡаршылау.** Йәштәрҙең машинаһы килеп туҡтағас, йыйылған ҡунаҡтар улар өҫтөнә ваҡ кәнфит йә дөгө, бойҙай һибә. Изге теләктәр әйтелә.

- Һау-сәләмәт булығыҙ!
- Тиң ҡартайығыҙ!
- Бәхетегеҙҙе һаҡлағыҙ!

**Ишек хаҡы.** Бинаға инә торған ишеккә арҡыры ике яҡтан ике ҡыҙ йә малай баҫа. Улар ҡулдарына бәләкәй тоҡсай бәйләнгән таяҡтар (сәрмә) тотҡан. Ишектән үткән һәр бер кеше ул тоҡсайҙарға тәңкә һала.

- Ишек хаҡы - 1 тәңкә!
- Туй хаҡы - 5 тәңкә!

Ингән бер кешене алып барыусылар ҡаршылап тора. Залда музыка уйнай. Ишек башына: "Матур ғаилә - йәннәт асҡысы" тип яҙылған.

**Еңгәләр һәм шаршау.** Ике ҡоҙалашыусы яҡ ҡапма-ҡаршы теҙелешеп баҫып, йәштәрҙе ҡаршылай. Дүрт еңгә (ҡыҙ һәм егет яғынан) ҙур шаршауҙың дүрт мөйөшөнән тотоп тора, шул шаршауҙы йәштәрҙең баш өҫтөнә күтәреп, уларҙы түргә оҙаталар. Тере коридорҙан йәштәр үткәндә ҡунаҡтар шаршау өҫтөнә тәңкәләр ташлай:

- Аҡ бәхеттәр!
- Ҡыуаныслы бәхетле ғаилә булһын!
- Балалары күп булһын!

**Ҡусҡар мөгөҙө**. Йәштәр үтәсәк юлға иҙәнгә "ҡусҡар мөгөҙ", "кәрес биҙәк", "оя" йә "өсмөйөш" тамғалы туҡыма һалына, туҡыма булмаһа, был тамғаларҙы аҡбур йә дөгө бөртөктәре менән төшөрөргә була.

Еңгәләр шаршауы аҫтында барған йәштәр аяҡтарын сисеп, тамғаларға "Бисмилла" тип баҫалар. Аҙаҡ аяҡтарына кейеп, ары атлайҙар. Ошо ваҡытта алып барыусы шулай ти:

- Ҡотто, бәрәкәтте, оя ныҡлығын, берлекте белдергән тамғалар аша үттегеҙ, һигеҙ ожмах асҡысы бирер, уңыш саҡырыр һеҙгә был тамғалар.

**Еңгәләрҙең әйткәне.** Табын өҫтәле янына яҡынлашҡанда йәштәр үҙҙәрен ҡаршылап торған ата-әсә эргәһендә туҡтай һәм уларға баш эйә. Еңгәләр шаршау аҫтында йәштәрҙе урындарына тиклем оҙатып, ултырталар ҙа, шаршауҙы төрөп алып, йыйылған аҡсаны шалтыраталар:

Еңгәләр: Нимә шалтырай?
Күмәкләп яуаплайҙар:
- Бәхет, ҡыуаныс (һ.б. теләктәр)!
Еңгәләр: Нимә шалтырай?
- Ҡура тулы бәрәкәт (һ.б. теләктәр)!
Еңгәләр: Нимә шалтырай?
- Хәләл хеҙмәт аҡсаһы (һ.б. теләктәр)!

**Ошонан һуң ҡунаҡтар ултырыша.**

**Зал биҙәлеше.**Йәштәр ултыра торған өҫтәл хан тирмәһе һымаҡ биҙәлгән. Баш остарында "Һеҙ Аллаһтың ҡурсалауы аҫтында бәхет күрерһегеҙ", "Туйығыҙ ҡотло, тормошоғоҙ бәрәкәтле булһын!" тип яҙылған туҡымалар эленгән. Стеналарға төрлө аҡыллы фекерҙәр яҙылған плакаттар: "Ике ярты инегеҙ - бер бөтөн булдығыҙ!", "Туйҙа туҡмаҡ та бейей!", "Ҡоҙа менән ҡоҙаса шаярһа - иген уңа!" һ.б. Стеналарға шулай уҡ төрлө суҡтар, таҫтамалдар беркетелә. Иҫкәрмә: стеналарға шарҙар, тиҙ ватыла торған биҙәүестәр элергә ярамай!

**Туй башланды.** Туйҙы "Фатиха" сүрәһен уҡып башлайҙар (уҡый белеүсе булмаһа, яҙма ҡуйыла). Алып барыусы мәжлесте аса һәм изге теләктәр теләй. Кәсәләргә һыу ҡойорға ҡуша. Йәштәрҙең тулы бәхете хаҡына аяғүрә баҫып терәһыу эсәләр. Ошо ваҡытта ҡумыҙ сиртелә йәки "Фатиха", "Ихлас" сүрәләре уҡыла. Барыһы ла ултыра, "Амин" тота.

**Көрәгә.** Алып барыусы "Туй ҡото - көрәгәгә бәрәкәт!" тигәс, егеттең атаһы менән уның туғаны буҙа йә ҡымыҙ көрәгәһе алып сыға. Буҙа йә ҡымыҙ һауыты өҫтөндә таҫтамал. Көрәгәне ҡыҙ яғы туғандары аса һәм бүләкте ала. Барыһы ла: "Көрәгәгә бәрәкәт!" тип ҡысҡыра.

Артабан ҡыҙ яғы туғандары көрәгә алып сыға. Ҡымыҙ мискәһе өҫтөнә шулай уҡ ҙур таҫтамал ябыла. Егеттең атаһы "Айыры тояҡ!" тип көрәгәне аса. Барыһы ла "Көрәгәгә бәрәкәт!" тип тәбрикләй.

Көрәгәсе егет яғынан билдәләнә. Ул көрәгә янында тора. Буҙа, ҡымыҙ шунан алынып, өҫтәлдәргә таратыла. Аяҡсылар ҡыҙ яғынан билдәләнә, улар һыйлай, эсемлек тарата. Теләктәр әйтелеп тора.

Көрәгә килә, көрәгә килә,
Көрәгәләр тулы буҙа килә,
Һай!
Көрәгәләр тулы буҙа килә
Ҡура-ҡура тулы мал килә!

**Ҡара-ҡаршы маҡташыу.** Беренсе ҡотлау һүҙен егеттең атаһы менән әсәһе әйтә. Ошонан һуң ҡыҙ яғы ҡоҙалары баҫып, егет яғы ҡоҙаларын маҡтай:

Ҡоҙаларҙың килгән кем,
Ҡоҙаларҙың килгән кем
Батырҙары, батырҙары!
Ҡоҙасаларҙың килгән кем,
Ҡоҙасаларҙың килгән кем
Матурҙары, матурҙары!

Ҡоҙалар хаҡына буҙа (ҡымыҙ) йотола.

Артабан егет яғы баҫып, ҡоҙаларҙы данлап йырлап яуап бирә:

Ал кәрәкмәй беҙгә кем,
Гөл кәрәкмәй беҙгә кем.
Ай, гөл булғас,
Ай гөл булғас!
Яттар кәрәкмәй беҙгә кем,
Яттар кәрәкмәй беҙгә кем.
Ай һеҙ булғас,
Ай һеҙ булғас!

Һүҙ әйтеү аралаштырып алып барыла. Ҡыҙ яғы туғандарына - ҡыҙ яғынан алып барыусы һүҙ бирә. Егет яғы туғандарына - егет яғынан алып барыусы һүҙ бирә.Өлкәндәрҙән башлап һүҙ бирелә: бабай, ағай, апай, туған, унан һуң еҙнә, еңгә, ҡайнаға, бүлә, бүләсәләр...

**Килен һандығы.** Ун кешегә һүҙ бирелгәс "Килен һандығын" сығаралар. Һандыҡ өҫтөндә ҡыҙҙың һеңлеһе ултыра:

- Һандыҡты һатам! - ти ул. Һандыҡ өҫтөнән ҡыҙҙы күтәреп алып, егеттең ҡустыһы уға бүләк әйтә. Иң беренсе бүләкте Ҡәйнә һатып ала (йә аҡса, йә йыр, йә бейеү башҡара). Килен һандығынан ҡыҙ яғы әҙерләгән бүләктәрҙе "һатып" алып бөтәләр. Йәнәһе, ҡыҙ кешенең ҡул оҫталығын тикшереү була. "Һандыҡ төбө" бүләген ҡоҙағый һатып ала. Килендең һөнәрен маҡтайҙар.

**Килен битен асыу.** Киленде никах мәлендә егеттең әсәһе бүләк иткән оло яулыҡ аҫтында, яулыҡтың дүрт мөйөшөнән дүрт еңгә тотоп, зал уртаһына саҡыралар. Килендең битен асыу йолаһы күрһәтелә. Егеттең ағаһы ҡамсы һабы менән яулыҡ осон күтәрә. Барыһы ла киленде күреп: "Собханалла!" - ти. Ағай кеше: "Айыры тояҡ киленгә!" - ти. Ошонан һуң киленгә теләк әйтеү башлана. Тәүҙә ҡыҙ яғы, унан егет яғы ҡыҙҙары бүләк бирә, теләк әйтә. Теләктәр:

Ҡыҙ яғы ҡатын-ҡыҙҙары былай ти:
Түлле бул, түлле бул,
Бүҙәнәләй түлле бул,
Һайыҫҡандан һаҡ бул,
Ҡабағандан ҡаптырма,
Тибәгәндән типтермә,
Ҡәйнәң менән ирешмә,
Апһындарға бирешмә!
Ир рәхәтенә кинән,
Донъяң булһын теүәл,
Балалар менән итәк тулһын,
Эш менән ризыҡ тулһын!

Егет яғы ҡыҙ-ҡатындары теләк теләй:
Килен, килен, киленсәк,
Өйөңдә һин - ҡолонсаҡ.
Ҡәйнәңдә һин - уйынсаҡ,
Иреңдән алда түшәккә
Барып ятма, киленсәк!
Иртәнән тауыш күтәреп
Һау-һаулама, киленсәк.
Еңгә:Минең кеүек сос бул!
Апай: Минең кеүек сираҡ бул!
Ҡәйнә:Иңемдән эш төшһөн
Башымдан хафа төшһөн!
Егет һеңлеһе: Ихлас бул, серҙәш бул!

Шунан теләктәр әйтеп, бүләк биреп киленде бейетеү башлана. Бейегән ыңғайы аяҡ аҫтына тәңкә ырғыталар, бүләк әйтәләр.

- Киленгә айыры тояҡ!
- Киленгә шәл!
- Киленгә ҡырғыс менән йыуғыс!

**Ҡоҙаларҙың ҡотлашыуы.** Килендән һуң төп ҡоҙалар бейей. Бер-береһенә тәңкә һалышалар. Төп ҡоҙалар таҫтамалдар менән алмаша, бер-береһен ҡотлайҙар. Төп ҡоҙағыйҙар бейей, яулыҡ бирешәләр. Ҡоҙасалар түңәрәкләп бейей. Шунан барыһы ла дөйөм күңел асыуға, бейергә, уйнарға тотона.

**Тәнәфес.**

**Икенсе өлөштә** һүҙ әйтеү һәм ҡотлауҙар дауам итә. Егет яғы, ҡыҙ яғынан ҡотлауҙар аралашып бара. Бер-нисә һүҙҙән һуң ҡоҙалар бер-береһенә бағышлап йыр йырлайҙар, теләктәр әйтешәләр. Был ваҡытта музыка, шаушыу туҡтала. Өлкәндәр һүҙ әйткәндә йәштәр аяғүрә баҫа.

**Йыуаса.** Егет яғынан йыуаса сыға. Тоҡсай (унын эсендә йыуаса, кәнфит, прәник һ.б.) күтәргән бер еңгә "Йыуаса" көйөнә бейей, тоҡ менән ҡайһы бер ҡунаҡтарға төртөп тә китә.

Тоҡтоң ауыҙын асайыҡ,
Йыуасаны сәсәйек
Ҡоҙағыйҙың күңеле булһын,
Бөтөргәнсе ашайыҡ! -

тип, ҡыҙ яғы ҡоҙаларынан һорай: "Ҡайҙа минең өлөшөм?"

Ҡоҙалар өлөш һала, йәғни аҡса, бүләк биреп, йыуаса һатып ала.

**Егетте һынау.** Егет йыуасаһынан һуң "Егет һынау" йолаһы башҡарыла. Егет йырлай, бейей, ҡурайҙа уйнай, шиғыр һөйләй. Үҙ һөнәрен күрһәтә. Ошонан һуң егеткә ҡайныһы бүләк бирә (күлдәк, таҫтамал, билбау, Ҡөрьән, ҡайыш һ.б.).

Егет кәләшен зал уртаһына алып сыға. Беренсе тапҡыр икәүләп бейейҙәр. Уларға эйәреп, ике яҡ ҡоҙалар менән ҡоҙасалар ярышып бейеүгә төшә. Егеттең әсәһе ҡолғанан бүләктәр алып, бейегән, йырлағандарға өләшә.

**Йәштәр һүҙ ала.** Йәштәр һүҙ әйткәндә кейәү менән ҡыҙ ултырып тора. Йәштәрҙең телмәре йыр, шиғыр, бейеү менән тамамланырға тейеш.

**Билбау.** Йәштәр һүҙ әйтеп бөткәс, кейәү майҙан уртаһына сыға. Күк төҫтә оҙон билбау килтерәләр. Тәүҙә кейәүҙең ағаһы теләк әйтеп, билбауҙы бер ҡат биленән урата. Икенсе ҡатты аҡһаҡал урата. Ул:"Телең ныҡ, илең ныҡ, үҙең уҡ бул!" - тип теләк теләй. Өсөнсө ҡатты ҡыҙ яғынан ир туғандар урата һәм теләктәр теләйҙәр:

- Бәхетле, ҡыуаныслы булһын юлың!
- Балаларығыҙ күп булһын!
- Батыр булһын!

Иҙ аҙаҡ аҡһаҡал билбауҙы ныҡлап бәйләп ҡуя. "Билең ныҡ булһын!" тигәнгә ишара булыр быныһы.

**Килен сәк-сәге.** Ошо ваҡыт килен сәк-сәге сығарыла. Ул, боронғолар күҙаллауынса, мөхәббәт, түл арттырыуға бәйле йола ризығы. Килен сәк-сәген һәр кем батмусҡа бүләк һалып, аҡса һалып ауыҙ итә. Кемдең аҡсаһы юҡ - бейей, йырлай, ҡурай уйнай. Сәк-сәк һалынған батмус бушарға тейеш, юғиһә, килен үпкәсел була.

**Килендең һәм кейәүҙең бүләге.** Кейәү ҡыҙҙың атаһына таҫтамал, әсәһенә яулыҡ бүләк иткәс, уларға "ҡайным", "ҡәйнәм" тиеп өндәшә. Быны барыһы ла ишетергә тейеш. Ҡыҙ егеттең атаһына һәм әсәһенә шулай уҡ бүләктәр бирә һәм "ҡайным", "ҡәйнәм" ("бейем") тиеп өндәшә. Быны бөтәһе лә ишетергә тейеш. "Амин!" тип, барыһы ла был күренешкә доға ҡылып, кәсәнән буҙа-ҡымыҙ эсеп ҡуя.

**Кейәү менән ҡыҙға һүҙ бирелә.** Улар барыһына рәхмәт әйтә, баш эйә. Еңгәләр уларҙың баш осона тағы ла шаршау күтәрә. Шаршауҙың дүрт мөйөшөнән тотоп, йәштәрҙе ҡояш әйләнәһенә бер тапҡыр уратып йөрөтөп, матур көй аҫтында залдан алып сығалар. Кейәү артына боролоп ҡарамайынса ғына баш аша тәңкә, кәнфит һибә. Бәхет, шатлыҡ уртаҡ булһын, тигәнгә ишара был. Ҡунаҡтар шул кәнфит, тәңкәләрҙе эләктереп ҡалырға тейеш.

**Хушлашыу.** Йәштәр сығып киткәс, оло түңәрәккә йыйылып бейеп, күңел асыу, төрлө уйындар китә. Төп ҡоҙалар туй табынын алып барыуҙа ҡатнашыусыларға ҡулъяулыҡтар, башҡа бүләктәр тарата. Көй оҙатыуында алып барыусылар ҡунаҡтарҙы оҙатып ҡала.

**Розалия СОЛТАНГӘРӘЕВА,**
**филология фәндәре докторы.**

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...

## ҡатмарлы фекерҙәре...

### Йәштәргә әйтәм: төкөмәгеҙ башығыҙҙы беҙ төкөгән мөйөштәргә!

**Замананы кисергәндәрҙе кисерә, башҡалар күргәнде күрә, түҙә, илай, көлә, хисләнә, ҡайғыра, шатлана, ялағайлана, ярамһаҡлана, дәүеренә, көнөнә яраҡлаша ла йәшәй әҙәм балаһы. Бынамын тигән шарттары булған мөхиттә донъяға килгән камил йәнле, аңлы бала ла, үҫә бара, эргә-тирәһендәге йәшәйеште өйрәнә, аңлай, тәжрибә туплай, яраҡлаша, өлкәндәрҙә булған бөтә яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла үҙләштерә. Ниндәй ғәҙәт, һәләттәрҙе күберәк үҙләштерә, ҡайһы яҡҡа нығыраҡ үҙгәрә - уныһы инде ата-әсәһенән, тәрбиәселәренән, йәмғиәттәге мөнәсәбәттәрҙән, йәшәү шарттарынан тора.**

Был донъяға килгәндә бер кемгә лә, тыумыштан һәләтһеҙ, тыумыштан һалынған тәбиғи тойғоларынан башҡа, тормош тәжрибәһе, йәшәйеш ҡағиҙәләре бирелмәй. Ҡыйыулыҡҡа, ҡурҡаҡлыҡҡа, тоғролоҡҡа, хыянатҡа, ғөмүмән, бөтә әҙәми сифаттарға ла бала ата-әсәһенән, өлкән быуын тәжрибәһенән генә өйрәнә ала. Шуны белә тороп, өлкәндәр бөтә балаларҙы йәштәрҙе ғәйепләргә ғәҙәтләнгән. "Кәкре таяҡтың күләгәһе лә кәкре", тигән кеүек, йәштәрҙең дә ололарҙан өлгө алмай сараһы юҡ. Тыумыштан бер кем дә боҙоҡ булып тыумай. Әгәр махсус шарттар тыуҙырғанда, өлкән быуынһыҙ үҫкән йәш быуын ниндәй кешелек сифаттарына эйә булыр ине икән? Ҡыҙыҡ...

Бөгөн йәштәр заман һынауҙарына, янаған хәүефтәргә ҡаршы торор, үҙҙәрен яҡлар өсөн төрлө ойошмаларға ылығып маташа. Тәбиғәттә лә шулай бит: бәләкәйерәк йәнлектәр, балыҡтар, ҡоштар үҙ затын һаҡлар, тоҡомдарын дауам итер өсөн ҙурыраҡ өйкөмдәргә туплана. Ерҙә шыуышҡаны ла, дүртаяҡлап йөрөгәне лә, берәй ҡурҡыныс янаһа, ҙурыраҡ, көслөрәк күренер өсөн үрә тороп баҫа. Кешеләрҙең тәбиғи асылдарында ла шул һыҙат булыуы шикһеҙ. Хәҙер тәрбиәлә ҡәтғи сиктәр, талаптар юҡ саҡта, яҡшылыҡта, изгелектә, итәғәтлектә үрнәк алырлыҡ, тыңлаусанлыҡ өлгөләр ҙә юҡ кимәлендә. Үҙен һаҡлау, имен ҡалыу юлын һәр кем үҙе ҡуҙаллай, үҙе хәстәрләй. Һәр кем үҙ яйына ҡуйылған: нисек теләйһең, нисек хәлеңдән килә, шулай йәшә! Уңһаң - афарин! Уңмаһаң, ул һинең генә бәлаң! Шулайтып, тарҡау йәмғиәт үҙ ағзаларын ситкә тибә, үҙе ишеләрҙән баш тарта, йәш быуынын рәнйетә.

Һөҙөмтәлә... Йәштәр бөгөн, өйөрөләп йөрөгән ел ыңғайына йыйылған ҡоро япраҡ өйкөмө кеүек, ҡайҙа һуғылырға белмәй, эркелешеп йөрөйҙәр. Ел тәьҫире көмеһә, өйкөмдәре шул ерҙә үк тарҡалып тарала, бер яҡтан көслөрәк ел өйөрөлмәһе килеп сыҡһа, шуға ҡушылып осоп китергә лә әҙер торалар. Көслө дауыл ҡупһа, бәләкәй генә өйөрөлмәләр бергә тупланып, хәтәр ҡойонға әүерелеүе лә ихтимал. Ҡоторонған ҡойон, көсөнә инһә, ғәйрәте менән юлындағы бөтә донъяны ҡыйратып үтә. Йәштәр ҙә шул япраҡтар кеүек, дөйөм идеяһыҙ, уртаҡ маҡсатһыҙ еңел генә берләшә, туплана, шулай уҡ еңел генә тарҡала, икенсе көслөрәк өйкөмдәргә күсә, теләһә ниндәй ҡойонға иң алдан ҡушылып китергә әҙер торалар. Илдә берәй бола ҡупһа, донъяны ҡыйратып йөрөүселәр, ғәҙәттә, шул дөйөм идеяһыҙ, уртаҡ маҡсатһыҙ, ләкин дөйөм ярһыу хисенә бирелгән йәштәр төркөмө була. Бер ҡойон уртаһында ярһыһа ла, уларҙың һәр береһе шәхсән тормош мәсьәләһен хәл итә: кемдәргәләр ниндәйгәләр ризаһыҙлығын белдерә, асыуын сығара, күңелен тынысландыра. Улар уртаҡ ярһыуға бирелгән, ә маҡсаттары берләшмәгән. Ә шул ярһыу хистәре маҡсатлы берләшһә?..

Элегерәк, йәштәрҙең сикһеҙ дәртен файҙалы юлға һалыу өсөн уҡыусылар, студенттар ГТО нормаларын үтәүгә, төрлө фестиваль, конкурс, ярыштарға йәлеп ителеп, шунда дөйөм идеяға, уртаҡ маҡсатҡа йүнәлеш бирелеп, аң кеүәте, тән көсө, йән дәрте ижадҡа, тәжрибә туплауға, шәхестең аҡыл, йән, тән мөмкинлектәрен үҫтереүгә файҙаланылды. Эшсе йәштәр ил масштабындағы завод, комбинат, гидроэлектростанциялар, тимер юлдар һ.б. төҙөләштәргә саҡырылып, уларға һөнәри һәләттәрен асыуға, үҙен таныуға, таланттары баһаланыуға, орден, миҙалдар, маҡтаулы исемдәр яулауға шарттар тыуҙырылды. Йәштәр физаҡәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтеп, иптәштәре алдында ихтирам, абруй яулап, дан ҡаҙанып, рухи ҡәнәғәтләнеү алды. Бөтә аң, йән, тән кеүәттәре ил, халыҡ, йәмғиәт мәнфәғәттәренә йүнәлтелде.

Хәҙерге йәштәрҙең ташып барған энергияһын дөрөҫ йүнәлештә, шәхсән ихтыяждарын һәм йәмәғәт мәнфәғәттәрен ҡәнәғәтләндереүгә файҙаланып буламы? Булһа, ҡайҙа? Бөйөк төҙөләштәр юҡ. Эш урындары етешмәй. Булған хәлдә лә, теләгән һөнәрең буйынса эш табыуы икеле. Магазинда һатыу итеп, компьютер эргәһендә ултырып йәки ваҡ-төйәк йомошсо булып, кемделәр хеҙмәтләндереп йөрөүҙән, яратмай ҙа эшләгән эшеңдән рухи ҡәнәғәтләнеү алып буламы? Белеме, һөнәре буйынса эш булмағас, ни хәл итһендәр? Эйе, "Үҙ эшенде ас та, алға!" тигән лозунгты йыш күтәрәләр. Әйтеүе генә анһат! Был бит шул уҡ, үҙ йүнендә үҙең күр, тип ҡул һелтәү, баштан себен осороу ғына. Фәрештә булып күренер өсөн шайтан ҡойроғон йәшереп йөрөй, ти. Йәмғиәтебеҙ ҙә шулай ҡылана түгелме? Яңы эш башлау өсөн тәғәйен шарттар тыуҙырылыуы мөһим! Кем бөгөн, ҡаҡ ерҙә үҙ хәләл көсөм менән үҙ эшемде асып, йәмғиәткә файҙа килтерәм, ғәҙел табыш алып, кешеләрҙең мәнфәғәттәрен уйлап, намыҫлы йәшәйем, тип әйтә ала? Бөгөнгө шарттарҙа ҡайҙандыр "таммайынса", хәрәмдән өлөш эләктермәйенсә үҙ эшен асып, алдашмай, урлашмай, хыянатлашмай табыш алып, байыусылар булһа ла, бик һирәктер...

1991-1992 йылдарҙағы капиталистик революция "көслөнөкө - замана" тигән сәйәсәт хакимлығын урынлаштырҙы. Ҡырағай тәбиғәттәге йәшәү рәүеше йәмғиәткә көсләп тағылды. Шул йылдарҙа тыуған, тәрбиәгә, иғтибарға мохтажлыҡ кисерел йәшәгән балалар ата-әсәләренең, донъя көтәм, ғаиләмде туйындырам, кешесә йәшәйем, тип ҡылғандарын, ҡыланғандарын күреп, бәхәсләшеп килешеүҙәрен ишетеп үҫте. Намыҫлы эшләп тапҡанына ғына әллә нимәләр ҡыйратып булмай икәнен дә аңланылар. Әҙәмсә йәшәйем тиһәң, урлап, талап табыу ҙа оят түгел икәнен белделәр, сөнки етеш тормош кисергәндәр нисек байығанын, ҡайҙан урлағанын да йәшермәне. Ҡурҡмаһылар, өркмәнеләр, киреһенсә, үҙҙәрен был тормоштоң хужалары итеп таныттылар. Уңышлы йәшәү өлгөләренә әүерелделәр...

Хәҙер килеп, 14-15 йәшлек уҡыусы балаларҙың үҙ-ара йыртҡыстарса мөнәсәбәттә булыуына аптырайбыҙ. Ҡайҙан килеп сыҡты был аяуҙы, оятты белмәгән боҙоҡтар, тип, белмәмешкә һалышып, аптырайбыҙ. Бала - ата-әсәһенең көҙгөһө. Шәүләм оҡшамай, тип, көҙгөнө генә ғәйепләү - көлкө! Хәҙерге үсмерҙәр үткән быуаттың 60-70-се йылдарында тыуып, пионер, комсомол сафтарында тәрбиәләнгән, 1991-1992 йылдарҙа ялған сәйәсәткә алданып, өмөтлө, ышаныслы киләсәктәренән яҙған йәштәрҙең - хәҙерге атай, әсәйҙәрҙең балалары. Ата-әсәһе тыуҙырған, ләкин йәмғиәт тәрбиәләгән үсмерҙәр! Бәлки, ҡурҡыныс күрәҙәлектәр, ләкин улар ҙур төркөмдәргә үҙ аллы берләшә башлаһа, йәмғиәт именлегенә янаған хәүеф артып китмәҫме икән? Әлбиттә, ниндәйҙер төркөмгә берләшкән өсөн уларҙы ғәйепләү ғәҙел түгел, сөнки һәр тере йәндә тәбиғи асылы берләшергә ҡуша. Нимә эшләргә, ҡайҙа һуғылырға, кемгә ылығырға, кемгә таянырға, кемгә ышанырға белмәй аптыранып йөрөгән йәш кеше, кем саҡ ҡына йылы һүҙ әйтә, кем әҙ генә киләсәккә өмөт бирә, кем ярҙам ҡулын һуҙа, шуға эйәрә. Ә хөкүмәт, йәмғиәт уларға нимәләр вәғәҙә итеү түгел, үҙенә ышандырып, өмөтләндереп тә маташмай.

Өлкәндәрҙең ошо хәлгә битарафлығы ғәжәпләнерлек. Йәштәрҙе яҙыҡ юлдан ҡурсалау саралары күреү урынына, уларҙы әҙәрлекләү, язаға тарттырыу ысулдары камиллаштырыла. Йәмғиәт был мөһим мәсьәләне хәл итмәй тороп, киләсәккә бер ышаныслы аҙым да яһай алмаясаҡ! Яңыраҡ ҡына алған һабаҡтар ҙа беҙгә фәһем түгел! 1991 йылдарҙа ялған сәйәсәт әһелдәренең хыянат ҡотҡоһона бирелеп, капиталистик идея өсөн дәррәү күтәрелгән быуын йәштәре капитал эйәһе булдылармы? Ябай хеҙмәткәр завод, фабрика, яхта хужаһы булыу түгел, фатирлы булыу хоҡуғынан ҡолаҡ ҡаҡты. Кемдәр Чубайс вәғәҙә иткән "Волга"ла рәхәтләнеп елдереп йөрөй икән? Бөтә халыҡты төп башына ултыртҡаны өсөн ул аферисты яуапҡа тарттырҙылармы? Ҡайҙа яҙаһын алып йонсоп ултыра икән, бахыр? Эйе, халыҡ һүҙе хаҡ: алданам тигәнде алдауы ла рәхәт, алдаусыһы ла табыла! Элегерәк ауылға "баба" килһә, малайҙарҙы сөннәткә ултыртыр өсөн, ҡуянат бирәм, тип, алдаштыра торғайнылар. Ә хәҙерге "баба"лар бөтә ил халҡын ҡуянат биреп тә тормай, сөннәткә ултырта ла китәләр. Паспорттарын теркәп алған ваучерҙарын һатҡанда ватандаштарыбыҙ халыҡ милкен аферистарға хосусилаштырырға рөхсәт биргәнен аңланымы икән, исмаһам? Хәҙер ҡысҡырыу һуң инде! Хөкүмәт үҙ халҡын шулай алдарға юл ҡуйғас, тағы кемгә ышанырға? Ул ваучерҙарҙы файҙаланып ҡапыл байыған беҙҙең капиталист, әллә нисәмә быуыны тупланған байлыҡ эйәләренән дә бай булып, әллә ҡайһы йылы диңгеҙ буйында беҙҙән рәхәтләнеп көләләр. Хәҙер кемгә үпкәләргә, кемгә зарланырға? Кем аңлар? Мыҫҡыл итеп көлөрҙәр, көләләр ҙә инде...

Иблистәр ҡорған хәтәр уйындар дауам итә. Кемдәрҙер шешәгә һатылды, кемдәрҙер күршеһен, туғанын алданы, кемдәрҙер кеше һатыуға керешә... Бер-береһенә ышанысын юғалтҡан кешеләр тарҡауҙар. Берләштереүсе көстәр юҡ. Берләштерергә теләүселәр ҙә юҡ, сөнки тарҡау, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлай белмәгән халыҡты талауы ла, алдауы ла, алдаштырыуы ла еңел, теләһә ниндәй сәйәсәткә күндереү анһат. Эйе, өлкәндәр үҙ файҙаһын, үҙ уңайлыҡтарын хәстәрләй белә. Донъя бөгөн улар ҡулында. Уларҙың тормоштан алған һабаҡтары күберәк. Ләкин ошо намыҫҡа, итәғәтлеккә ҡытлыҡ дәүерендә тарҡаулыҡта ҡыйырһытылып үҫкән балалар иртәгә тормош эйәләренә әйләнәсәк. Һаҡлы, яҡлы, тыныс йәшәүҙән мәхрүм ителгән бала саҡтары өсөн кемде ғәйепләрҙәр, өлкәндәргә, донъяға асыуҙарының ҡоһорон ҡайҙа сығарырҙар, үстәрен кемдәрҙән һәм нисек алырҙар? Донъя дилбегәһен ҡулдарына алғас, улар нимә ҡылырҙар, ҡайҙа боролорҙар? Нисек ярһырҙар? Аяуҙы белерҙәрме? Әллә һеҙгә шул кәрәк, тип, тере йәндәр өҫтөнән тапап барырҙармы? Һорауҙар күп. Халыҡ бушҡа ғына "Олоған эт тешләмәй, аҫтыртын эттән һаҡлан", тимәгәндер.

Һәр быуын йәшәгән дәүерендә маҡтанырлыҡ та, хур булырлыҡ та эштәр ҡылалыр, әммә ләкин ватаныбыҙ тарихында, хәҙерге быуын кеүек, үҙ яҙмышына, киләсәгенә был хәтлем еңел ҡараусылар булмағандыр. Ә бит дөйөм идея, берҙәм маҡсатта йәшәгәндәр генә ышаныслы, бәхетле киләсәккә өмөтләнә ала...



*Төрлө һәләт, төрлө ғәҙәт бөтәбеҙҙә! -*
*Тигән булып аҡыллы һүҙ әйтәбеҙ ҙә,*
*Теләнә кем уйлап тапҡан тейештәргә*
*Физаҡәр һәм күҙҙе йомоп ышаныуҙан,*
*Маңлайҙарға оро алып күп эштәргә,*
*Һуғылабыҙ һаман бер үк мөйөштәргә.*

*Һөрән һалып әйтер инем мин йәштәргә,*
*Әйтер инем яңы быуын дуҫ-иштәргә:*
*Аумаҡайлыҡ, хаслыҡ, һатлыҡ ятып ҡалһын*
*Һеҙ аҡыллы урап үткән мөйөштәрҙә.*
*Һеҙ беҙҙән дә аҡыллырак, һаҡ булығыҙ,*
*Төкөмәгеҙ беҙ төкөгән мөйөштәргә!*

**Урал МОСТАФИН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҒАН ТЕЛДӘ ЯҢҒЫРАҒАН...

## реклама ла тәьҫирләрәк

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте гәүһәрҙәре кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Ботичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемләге кеше ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында домафин гармоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

■ Телефондан оҙаҡ итеп һөйләшеү терһәк нервыһының тартылыуына килтереүе ихтимал, тип белдерә Американың Си-Эн-Эн телекомпанияһы. Ҡулдың оҙайлы ваҡытҡа бөгөлгән хәлдә тороуын табиптар кубиталь туннель синдромы йәки "мобиль терһәк" тип атап йөрөтә. АҠШ-та йәшәүсе хирург-ортопед Леон Бенсон белдереүенсә, һуңғы осорҙа бындай сир менән мөрәжәғәт итеүсе ауырыуҙар һаны арта бара. Терһәк нервыһында ҡан әйләнеше боҙолоу сәбәпле, бындай кешеләрҙең ҡулдары һыҙлай, ойой йәки унда сәнсеү барлыҡҡа килә. Кубиталь туннель синдромының ҡайһы бер осраҡтарында пациентка хирургик дауа талап ителә. Шуға ла бындай күңелһеҙлеккә тарымаҫ өсөн телефонды ике ҡулды сиратлап тотоп һөйләшергә кәңәш ителә.

■ Туған телдәге реклама теге йәки был тауарҙы яҡшыраҡ һатыу мөмкинлеге биреп кенә ҡалмай, кешелә көслө эмоциональ тойғолар уятыуға ла һәләтле икән. Белгестәр аралашыу өсөн ике йәки өс тел ҡулланылған милләт кешеләренең аңына реклама лозунгыларының нисек тәьҫир итеүен тикшереп ҡараған һәм тауар тураһындағы мәғлүмәт туған телдә яңғырағанда ғына тәьҫирләрәк икәнлеген дәлилләй алған. Бында телдең грамматик йәки орфографик үҙенсәлектәре, сит телде аңлауҙағы ауырлыҡтар мөһим түгел. Туған телдәге телмәр һәр кешенең күңелендә ыңғай тойғолар уятыу һәләтенә эйә, ти психологтар.

■ Физик күнекмәләр менән артыҡ шөғөлләнеү ҡатын-ҡыҙҙарҙы түлһеҙ яһай, тип белдерә Норвегия тикшеренеүселәре. Өс меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан был тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, тренажер залдарында ауыр күнекмәләр менән шөғөлләнгән гүзәл заттарға түлһеҙлек диагнозын 3,54 тапҡыр йышыраҡ ҡуялар. Күнекмәләрҙе кәметеү менән ҡатындар бер йылдан һуң әсә булыу бәхетенә ирешә алған. Белгестәр әлегә ауыр күнекмәләрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың репродуктив функцияһы араһындағы бәйләнештең сәбәптәрен асыҡлай алмаған, шулай ҙа артыҡ көсөргәнештән һаҡланырға кәңәш итә.

БАҠСА

# БӨЖӘКТӘРГӘ ҠАРШЫ...

## гәрсис үләне һәм көл

**Йәй көнө-төнө баҡсала ятмаһам да, мин дә йәшелсә-емеш үҫтерергә яратам, шуға ла был шөғөлдә үҙ итеүсеrangeләргә үҙемдең тәжрибәмдән сығып, бер нисә кәңәш еткергем килә.**

● Кәбеҫтә үҫентеләрен йыш итмәй генә, күмеп тороуға еңел булһын өсөн 12-15 см тәрәнлектәге, 30-35 см киңлектәге соҡорҙарға ултыртығыҙ. Кәбеҫтәне күмеп тормаһаң, күпме һыу һипһәң дә күсән яһалмай. Үҫентене ултыртып, ул саҡ ҡына үҫеп күтәрелә башлағас та төбөн күмә һалығыҙ. Йәй дауамында был эште тағы 2-3 тапҡыр эшләргә тура киләсәк.

● Мин баҡсаға аҙнаһына бер тапҡыр барам. Иң тәүҙә һыуыҡ ҡоҙоҡ һыуы менән кәбеҫтәнең япраҡтарын йыуҙырып алам. Япраҡтағы төрлө бөжәк йомортҡалары йыуылып төшөп бөтә, кәбеҫтәмдең япраҡтары тишкеләнмәй, бөтөн генә ултыра. Сәскән кәбеҫтәгә ҡорт төшмәһен өсөн уның араһына гәрсис орлоғо һибеп сығам. Ул ҡый үләне кеүек бейек булып үҫә, ваҡ ҡына һары сәскә ата һәм йәй буйына кәбеҫтәне бөжәктәрҙән һаҡлай. Гәрсис һатыуҙа бар, руссаһы горчица листовая тип атала. Ошо уҡ гәрсис орлоғон кишер, ҡарбуз, ҡабаҡ, ташҡабаҡ түтәлдәренең ситенә һирәк кенә итеп төртөп сыҡһаң, һары ҡорт (проволочник) яфаламаҫ. Түтәл ситенә әҙләп кенә көл һипһәң дә һары ҡорт һәм ҡырмыҫҡа булмай. Ҡырмыҫҡа үрсеп китһә, көлдә түтәлдең өҫтөнә лә һибергә була. Көҙ помидорҙарҙы йыйып алып бөткәс, уның япраҡтарын һәм һабағын балта менән сапҡылап, ер ҡаҙғанда тупраҡ араһына һалдырып барһаң, ул ерҙә ҡорт булмай.

Был бөжәктәр ҡарбузды ла ярата, шуға ул ергә мотлаҡ көл һибергә кәрәк. Мин ҡарбузды майҙың егерменәрендә полиэтилен аҫтына сәсәм. Ҡыяр кеүек уҡ үҫә, бигерәк тә ҡояшлы йылда бик уңа.

● Баҡса ҙур булһа, зыян килтереүсе ҡорттар менән көрәшеүе ауыр, шуға ла көҙ һайын уңышты йыйып алғас, бөтә баҡса ерена 1 сутый ергә 1 кг иҫәбе менән яндырылған эзбиз һибергә кәрәк.

Был апай һыуыҡ һыуҙан икеләтә файҙа күрә, бөжәктәрҙән дә ҡотола, һыу ҙа һибелеп тора, тип, бөтә йәшелсәләрегәҙә һыуыҡ һыу һибеп ташламағыҙ. Кәбеҫтә, редис, кишер һалҡын һыуға бирешмәһә лә, ҡыяр, ҡарбуз, төрлө ҡабаҡтар, борос, помидор, баклажан, патиссонға һыуыҡ һыу һипһән, уларҙың тамыры серей.

● Һәр баҡсасыға айыу баланы (жимолость) ултыртырға кәңәш итәм. Был ҡыуаҡ июнь башында уҡ өлгөрә. Емештәре С, В1, В2 витаминдарына, каротинға, микроэлементтарға бай, ҡыш буйына хәлһеҙләнеп киткән организм өсөн бик файҙалы. Айыу баланын көҙҙән ултыртыу яҡшыраҡ. Бер майҙансыҡҡа бер нисә, кәмендә ике төрлө сорт ултыртығыҙ, улар бер-береһен һеркәләндереп, емеште күберәк бирәсәк. Ҡыуаҡлыҡ аралары 1,5-2, рәт аралары 2,5-3 м булһын. Емеш биреп бөткәс, бер йыллыҡ хәлһеҙ ботаҡтарҙы ҡырҡып ташлағыҙ. Насар үҫкән емеш биреүсе ботаҡтарҙы ла ҡыҫҡартып торогоҙ, шул саҡта ул ҡуйыраҡ булып үҫәсәк. Беҙҙең ҡыштарҙы яҡшы кисергән, бейеклеге 80 см-ҙан 1,5 м-ға тиклем генә булған, күп ҡарау талап итмәгән был ҡыуыҡ 15-17 йыл буйына емеш бирә. Уны үрсетеүе лә еңел, ҡарағат, крыжовник кеүек уҡ, ҡыуаҡтың аҫтағы ботағын ергә әйеп һалып, урта өлөшөн ер менән күмеп ҡуйығыҙ. Киләһе йыл йәй буйына һыу һибеп торогоҙ, ә август-сентябрь айҙарында ботаҡты үҫентенән иплəп кенә ҡырҡып алып, алдан әҙерләп ҡуйған соҡорға ултыртып, күп итеп һыу ҡойоғоҙ. Айыу баланы ҙур ағастар ышығында яҡшы үҫә, әммә яҡтылыҡ яҡшы төшөрләк булһын.

● Виноград (йөҙөм) үҫтерергә теләүселәргә лә кәңәшем бар. Виноградтың Башҡортостан климатына яраҡлаштырылған сортын һайларға кәрәк. Уны ҡышын өшөүҙән һаҡлау өсөн төбөнән ситтәрәк ерҙе ҡаҙып, ботаҡтарҙы күмеп ҡуйырға кәрәк. Әгәр ҙә быны эшләп йөрөргә ваҡытығыҙ булмаһа, ботаҡтарҙы бер буйға теҙеп һалығыҙ һәм ике яғына бағана һалып ҡуйығыҙ. Шулай иткәндә, был урынға ҡар йыйыла һәм ботаҡтарҙы яҡшылап ҡаплай. Виноград яҙғы һалҡын елдәрҙе, ҡырауҙы яратмай, ҡайһы бер йылдарҙа бөрөләнеп бөткәс тә туңып ҡуя. Шуға ла уны һалҡын ел үтмәгән урынға, мәҫәлән, баҡса өйөнөң ышығына бер рәт итеп ултыртырға кәрәк. Виноград йыш ултыртылһа, емеше аҙ була. Шулай уҡ оҙонайып киткән үҫентеләрҙе көҙ көнө ҡырҡып, ҡыҫҡартып торогоҙ. Яҙ көнө ҡырҡырға ярамай, сөнки ҡырҡылған урындан һут ағып тороп, виноград үҫеүҙән туҡтай.

● Алмағас, ҡарағат һәм башҡа емеш ағастары ултыртҡанда янған тиҙәкте күп итеп өҫтәй күрмәгеҙ. Сөнки үҫентеләрҙең тамыры сығып тора, ә тиҙәк уны яндырыуы ихтимал, ә яраланған ағас үҫә алмай. Ә помидор, ҡыяр, ҡабаҡ кеүек йәшелсәләр янған тиҙәкте бик ярата.

● Ағас үҫентеләрен махсус питомниктарҙан һатып алығыҙ. Юғиһә, машинаға тейәп, йылы яҡтан килтерелгән үҫентеләрҙе Башҡортостан питомниктарыныҡы тип һатыусылар ҙа бар, уларҙың ағастары ҡыш көнө туңа.

● Баҡсасыларға тағы бер кәңәш: баҡса өйөнөң эсен ағартҡандан һуң иҙән йыуған һыуға бер ҡалаҡ үҫемлек майы өҫтәһәгеҙ, иҙәндә аҡ балсыҡтың бер тапы ла ҡалмаҫ.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## ерҙәге ожмах сағылышы ул

**Балаларҙы тәрбиәләгәндә нимәгә иғтибар бирергә кәрәк?**

Иң беренсе, балалар - Аллаһы Тәғәләнең беҙгә биргән бүләге икәнде аңлау мөһим. Ғаилә бәхетенең тәүге көйө ата-әсәләр йөрәгенә яҡын булған яңы тыуған сабый тауышынан башлана.

Бөйөк хәҙисттәрҙә сабыйҙар "ожмах балалары", "йөрәк емештәре", "Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте" тип телгә алына. Ысынлап та, балалар Аллаһы Тәғәләнең бөйөк ниғмәте ул. Сабыйҙар көлгән, шатланған тауыштар ожмах гәүһәрҙәре менән сағыштырыла. Һәр әсә өсөн сабыйын үҫтереү, тәрбиәләү һәм йәмғиәткә бүләк итеү иң яҡшы шөғөл һанала. Әсә йөрәге - бала өсөн тәүге мәктәп ул. Изге балалар Ҡиәмәт көнөндә ата-әсәһе өсөн уларҙы тамуҡ утынан айырып тороусы пәрҙә булып торасаҡ.

Ғаиләнең мөһим бер бурысы - Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән балаларҙы лайыҡлы һәм изгелекле мосолмандар итеп үҫтереү. Үҙ иленең тәҡүәле, намыҫлы патриоттарын тәрбиәләү - һәр ата-әсәнең мөһим бурысы. Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ата-әсәләрҙең бурыстарын шулай тип билдәләп үткән: "Һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе һәм һәр кем үҙ көтөүе өсөн яуаплы. Ир - ғаиләнең, ҡатын - өйөнөң һәм балаларының көтөүсеһе булып тора һәм уның өсөн яуаплы".

Балаларҙы тәрбиәләү, иң беренсе, ата-әсәләрҙең үҙҙәренең тәрбиә кимәленән тора. Ата-әсәләр тәрбиә ысулында иғтибар итергә кәрәк булған бер нисә төп факторҙы билдәләп үтәйек.

● Балаға уның холҡона яҡшы тәьҫир итәсәк лайыҡлы мосолман исеме ҡушырға.

● Бала изгелекле мөхиттә үҫһен һәм тәрбиәләнһен өсөн уны тик хәләл ризыҡтар менән туҡландырырға.

● Балалар үҫә килә һөйләшеү манераһынан алып холоҡ-фиғелдәргә тиклем ата-әсәһенән өлгө ала. Шуға күрә үҙеңдең балаларыңа яҡшы өлгө булырға кәрәк. Мәҫәлән, иреш-талашҡа урын булған ғаиләлә үҫкән бала үҙе лә насар сифаттар үҙләштереп асыулана, яуызлаша башлаясаҡ.

● Һиҙҙермәй генә баланың үҙ-үҙен тотошон контролдә тоторға тырышырға. Бигерәк тә кешеләрҙән оялып, баланы ҡылған ҡылыҡтары өсөн яңғыҙ ҡалғанда әрләүҙән тыйылырға кәрәк, юғиһә, был көсһеҙлөк, ике йөҙләлек барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе буласаҡ.

● Баланың яҡшы эштәрен хупларға ҡушыла, сөнки хуплау һөҙөмтәһендә яҡшы эштәр баланың шәхесендә ныҡлы урын ала. Шулай уҡ хаталарын иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай, юғиһә, ваҡытында иғтибар ителмәгән ҡылыҡтар баланың насар ғәҙәтенә әйләнеп китеүе ихтимал. Шуға күрә баланы тәрбиәләгәндә ташламалар эшләмәҫкә.

● Баланы йыш-йыш яҙалауҙан һәм оялтыуҙан тыйылырға. Мәҫәлән, нимәнелер ваткан өсөн уны әрләргә кәрәкмәй, сөнки был хәлдең беҙҙең менән дә булыуы ихтимал.

● Ҡағиҙәләрҙе һәм тыйыуҙарҙы аңлатҡан ваҡытта уларҙың сәбәптәрен балаға аңлайышлы итеп еткерергә кәрәк.

● Баланы үҙ-үҙен тоторға һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү мотлаҡ.

● Баланы биргән ниғмәттәре өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт һәм шөкер әйтергә өйрәтергә. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күркәм тормошонан өлгө алып балаға рухи тәрбиә бирергә тырышырға кәрәк.

● Иртә йәштән баланы Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылырға өйрәтеү, Аллаһҡа хеҙмәт итеүҙең мөһимлеген һәм яуаплылығын аңлатыу мөһим.

Бер һүҙ менән әйткәндә, идеаль балалар тәрбиәләү өсөн идеаль ата-әсә булыу кәрәк. Баланы тәрбиәләү иң тәүҙә ата-әсәнең һөйөүенән башлана. Улар сабыйҙарын Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте, бүләге булараҡ яратырға тейеш. Был һөйөү был донъяла ла, теге донъяла ла бәхет алып киләсәк. Әгәр беҙ лайыҡлы нәсел тәрбиәләп ҡалдырмаһаҡ, беҙҙең ҡәберҙәребеҙ ташландыҡҡа әүереләсәк.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# ИМАН ҠЕҮӘТЕ,

## йәки Мөхәммәт бәйғәмбәр өлгөһөнөң уйландырғаны



### Изгелек эшләргә ынтылып тороуы

Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) мәсеттә йәмәғәт алдында намаҙ уҡырға керешә. Тик бер аҙҙан намаҙын өҙә лә, бик тулҡынланған килеш өйөнә табан йүнәлә. Шул тиклем борсолған, ҡаушаған ҡиәфәтен күреп, кешеләр яңғын сыҡманымы икән тип уйлайҙар. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) кире әйләнеп килә. Бөтөнләй тынысланған һәм намаҙын дауам итә. Намаҙҙан һуң сәхәбәләре уны нимә хафаға һалыуын һорайҙар. Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с.): "Намаҙҙан алдараҡ фәҡирҙәргә таратыр өсөн ризыҡ килтергәйнеләр. Мин уны өләшергә онотҡан да ҡуйғанмын. Намаҙ мәлендә шул иҫкә килеп төштө. Ғәйшәгә барып, саҙаҡа таратырға ҡушып килдем", - тип яуап бирә. Бына был, исмаһам, тәҡүәлек, иман! Шулай уҡ бәйғәмбәрлектең был донъя менән бәйләнеше.

Ниндәйҙер ваҡытлыса әүрәткестәр, алдаҡтыстар уны юлдан яҙлыҡтырырға тырышып ҡараған, ләкин Бәйғәмбәр ҡулы менән бер һелтәүҙә был алдаҡтыстарҙы юҡ итә алған.

### Оҙаҡ ваҡыт ас йөрөгән

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) йыш ҡына бер нисә көн рәттән ас йөрөгән саҡтары булған. Дөрөҫөн әйткәндә, уның үҙ ғүмерендә хатта арпа бәлешен дә бер тапҡыр ҙа туйғансы ашағаны булмаған. Өйөндә аш бешерер өсөн айҙар буйы ут яҡмағандар.

Бер мәл ул нәфел намаҙын ултырып уҡый. Ул уҡып бөткәс, Әбү Хурайра (р.ғ.) һорай ҡала: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Ауырыйһығыҙмы әллә? Ни өсөн намаҙҙы ултырған килеш уҡыныҡыҙ?" Бәйғәмбәрҙең яуабы тегенең иҫен китәрә: "Эй, Әбү Хурайра, бер нисә көн инде ауыҙыма тәгәм дә ризыҡ ҡапмағанмын, ашарыма юҡ. Хәл булмағас, аяҡта баҫып тороуы ҡыйын. Шуға ултырып уҡыным".

Быңдай яуап ишеткән Әбү Хурайра (р.ғ.) илап ебәрә. Үҙ хәлен онотҡан Аллаһ Рәсүле уны йыуатырға керешә: "Илама, Әбү Хурайра! Был донъяла кисергән аслыҡ кешене теге донъялағы ғазаптарҙан ҡотҡарасаҡ".

Ул - ысын лидер. Ҡул аҫтындағылар араһында ла бер нисә көн рәттән ас йөрөгәндәре була. Үҙенең йәшәү рәүешендә Аллаһ Рәсүле улар менән тиңләшә. Үҙенең ҡул аҫтындағылар араһында килем-табыш кимәле буйынса ул - иң хәйерсеһе, һәм был уның үҙ ҡарары. Эйе, теләһә, ул бай йәшәй алыр ине, быны эшләүе уның өсөн ауыр булмаҫ ине. Мәсәләи, үҙенә бүләк итеп биргән нәмәләрҙе бүтәндәргә таратмаһа, үҙенә ҡалдырһа. Ғүмер ахырына тиклем ҡыҫынҡылыҡты ла тоймаҫ ине. Ләкин Рәсүл улай итергә уйлап та ҡарамай. Дөрөҫ, ошо фиҙакәрлеге менән Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙен был тормоштан бөтөнләй айырған, унан баш тартҡан тип ҡарарға ярамай.

Аллаһ Рәсүленең быңдай аҙымынан яуыз кешеләр көләргә лә маташа, уны "бер телем - бер кейем", тип күрһәтергә тырышалар. Кем теләй, шул эшләгән дә, байыған да һәм Аллаһ ҡушҡанса, зәкәтен дә түләгән. Шул рәүешле, быңдай кеше бүтәндәргә ярҙам итә алған, бер кем дә быңдай хәләл хеҙмәткә ҡаршы түгел. Ул Исламда рөхсәт ителә лә, хупланыла ла. Ләкин Рәсүл һәм уның сәхәбәләре беҙ алда телгә алған сифаттарға эйә булып, үрнәк күрһәтергә тейеш ине. Шуныһы, Мәккә һәм Мәҙинә сиктәрен үтеп киткән һәм туҡтауһыҙ арта барған өммәтте рухи асыҡлыҡта һәм сафлыҡта тотоп тороп булмаҫ ине. Матди ихтыяждан тыш, әҙәм балаһының йәне, рухиәте, намыҫы бар бит әле. Һәм Аллаһ Рәсүле үҙенең өммәтен рухи үҫеш юлына йүнәлтергә ынтылды. Уларҙа күрергә теләгән фиҙәҡәрлекте сәхәбәләренә генә түгел, ә бөтөн кешелеккә үҙ миҫалында күрһәтте.

Төн уртаһы етә. Мөхәммәт бәйғәмбәргә (с.ғ.с.) аслыҡ йоҡлап китергә бирмәй. Йоҡоға талһа, асығыу тойғоһонан да бер аҙға ҡотолоп торор ине. Ләкин йоҡо алмағас, тора, өйөнән сыға ла урам буйлап китә. Бер шәүлә күҙенә салынғандай була. Кемдер арттан эйәргән. Ныҡлабыраҡ ҡарағас... таный. Ул - Бәйғәмбәрҙе яңғыҙын бер ҡасан да ҡалдырмаған кеше. Һәр ваҡыт уның янында - бөтөн ынтылыш һәм эштәрендә лә. Бына хәҙер, төн уртаһында ла. Гүйә, улар Мәҙинәнең ошо ерендә осрашырға һөйләшкәндәр, тиерһең. Әбүбәкер хәҙрәт (р.ғ.) яҡын килгәс, Аллаһ Рәсүле сәләм бирә. Шунан һорай: "Эй, Әбүбәкер! Һуң бит инде, быңдай мәлдә һине нимә урамға сығырға мәжбүр итте?"

Әбүбәкер (р.ғ.), Аллаһ Рәсүле менән осрашһа, һәр саҡ үҙенең һыҙаларын-ауырлыҡтарын онотор булған. Бер тапҡыр Мәккәлә Бәйғәмбәрҙе яҡлап алышҡан саҡта уға бик ҡаты килтереп һуғалар, Әбүбәкер (р.ғ.) йығыла. Көнө буйы иҫһеҙ ята, аңына килгәс, тәүге һорауы шулай була: "Аллаһ Рәсүленә бер нәмә лә булманымы?". Әбүбәкерҙең әсәһе Өммә Умара асыулана: "Үҙең саҡ үлмәй ҡалдың, ә һаман уның хәлен белешәһең". Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) тураһында белешмәһә, улының үләсәген белмәй әсә. Сөнки Аллаһ Рәсүле - уның йәшәү сығанағы. Әле лә бында уны ниндәй көс алып килгәнен аңлата алмаҫ ине. Бәйғәмбәрҙең (сғ.с.) һорауына шулай тип яуап бирә: "Аслыҡ. Өйҙә ашарға бер нәмә лә тапманым. Йоҡлап китә алмағас, йөрөп килергә тип сыҡҡайным". Бәйғәмбәр ҙә Әбүбәкергә аслыҡ арҡаһында урамға сығырға мәжбүр булғанын әйтә.

Тап шул мәлдә тағы ла бер шәүлә ҡалҡып сыға. Быныһы инде - оҙон буйлы мөһабәт кәүҙәле Ғүмәр хәҙрәт. Аллаһ Рәсүле Әбүбәкерҙе (р.ғ.) үҙенең "уң ҡулы" итеп ҡуйған була, әле кемде "һул ҡулы" итергә белмәгән сағы. Шул һорауына яуап рәүешендә ул да был урынға килеп баҫа. Эйе, Ғүмәр хәҙрәт (р.ғ.) килде. Иҫәнләшәләр. Һәм кешеләрҙән солтаны Ғүмәрҙән ни өсөн төндә ял итмәүен һорай. Ғүмәр (р.ғ.) яуап бирә: "Аслыҡ, Аллаһ Рәсүле, шул мине урамға сығырға мәжбүр итте". Шул саҡ Рәсүл Әбүл Хайсамды иҫенә төшөрә. Өйө лә урам аша, ҡаршыла күренеп кенә тора. Көндөҙ Бәйғәмбәр уны баҡсаһында күргәндәй ине. Бәлки, ул дуҫтарын хөрмә менән һыйлап, аслыҡтан ҡотҡарыр. "Әйҙәгеҙ, Әбүл Хайсамға барып киләйек", тип әйтә Бәйғәмбәр.

Быңа улар йортҡа килеп етәләр. Әбүл Хайсам да, ҡатыны ла йоҡлаған була. Өй эсендә йәнә лә биш-алты йәшлек балалары бар. Бәйғәмбәр(сғ.с.): "Эй, Әбүл Хайсам!" - тип өндәшә. Ул да, ҡатыны ла ишетмәйҙәр. Ләкин бала түмле йоҡоһонан уяна ла: "Атай, тор, Ғүмәр килде!"- тип өндәшә. Әбүл Хайсам балаһы төшөн һөйләй тип уйлай: "Улым, йоҡла, был ваҡытта төн уртаһында Ғүмәрҙең ниндәй йомошо булһын". Бала йоҡоға тала. Ишек асылмағас, Әбүбәкер хәҙрәт иплән кенә өндәшә: "Эй, Әбүл Хайсам!" Бала яндан атылған уҡ шикелле һикереп килеп баҫа. "Атай, тор, Аллаһ Рәсүле килде!" Әбүл Хайсам атылып барып ишекте аса. Үҙ күҙҙәренә ышанмай тора: төндән ошондай мәлендә солтандарҙың да солтаны уның өйөнә килеп инһенсе әле! Шундуҡ түргә саҡыра. Бәрән һарыҡ сала. Быңдай бәхет кешенең ғүмерендә бер генә булыуы мөмкин. Бөтә йәнен фиҙа итһә лә был аҙ тойолор ине уға... Хөрмә, һөт һәм ит алып килеп, кәҙерле ҡунаҡтарын һыйларға керешә...

Ҡунаҡтар фәҡәт аслыҡты баҫырлыҡ дәрәжәлә генә ризыҡланалар, һәм Рәсүлдең күҙҙәре йәнә йәшләнә. Әйткән һүҙҙәре ошо ғәҙәти бер ваҡиғаға тәрәнлек һәм бөйөклөк бирә: "Аллаһ менән ант итәм, ошо ләззәт өсөн Ул һеҙҙе яуапҡа саҡырасаҡ". Артынса аят уҡый: "Шунан шул көндө һеҙҙән, әлбиттә, (донъялағы) рәхәтлек тураһында һоралаСаҡ" (Ҡөрьән, 102:8).

Ул быңа шундай һөҡланғыс кеше булды: тормоштағы бөтә нәмә лә һәр саҡ хаҡлы һәм бөйөк. Ғүмәр хәҙрәт (р.ғ.) - уның иң яҡын дуҫтарының береһе, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) сама менән генә ризыҡланыуы, тормош көтөүҙәге ябайлығы тураһында шулай һөйләгән: "Хаҡ Тәғәлә менән ант итәм, Аллаһ Рәсүле таңдан алып кискә тиклем яфа сигә ине, сөнки ауыҙ итергә хатта иң насар хөрмәһе лә - "дакал"ы ла - булмай торғайны"

Ә бит теләһә, уға һәммәһе лә иң мул һый әҙерләп торор ине. Быныһ кәрәге булмай. Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) көн дә бирелгән бүләктәр менән үҙен дә, ғаиләһен дә тулыһынса тәьмин итә алыр ине. Ләкин ул бөтәһен дә мохтаждарға таратып бирер булған, үҙенә бер нәмә лә алып ҡалмаған.

Тормош рәхәтлектәренән ни өсөн файҙаланмауы тураһында һораған саҡтарында ул шулай тип яуап бирә: "Инде Исрафил ҡулына сурҙы алған һәм уға өрөр өсөн Аллаһтың әмерен көтә, шундай хәлдә мин ҡалай итеп рәхәтлек тураһында уйларға йәки ләззәт кисереп йәшәргә тейеш! Быңдай мәлдә кеше нисек инде тормош шатлыҡтарына сума алһын?"

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне. (Аҙағы).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ғәфү итергә өйрән

Тормошоғоҙҙағы иң мөһим кеше менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу өсөн аҫҡы аңда ғәфү итергә өйрәнергә кәрәк. Шундай күнекмә:

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинаны күҙаллағыҙ.
- Тыныс үҙән буйлап китеп бараһығыҙ тип күҙ алдына килтерегеҙ, һуңынан бейек, ныҡ ағаслы урман эсенә инәһегеҙ, артабан инде тыныс күлле аҡланға килеп сығаһығыҙ.
- Һыу ситенә килеп, үҙегеҙҙең ундағы сағылышығыҙға ҡарағыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына: "Мин һине үткәндәге барлыҡ уңышһыҙлыҡтар һәм хаталар өсөн ғәфү итәм. Һинең мине ғәфү итеүеңде үтенәм", - тиегеҙ. Һуңынан: "Мин һине яратам", - тип өҫтәп ҡуйығыҙ.
- Шул уҡ юл менән кире ҡайтығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ. Яҙыуҙы бер яҡ ситкә алып ҡуйып, күнекмәне хәҙер үк эшләһәгеҙ ҙә була.

Һеҙҙе был тормошта алға алып барған нәмә - ул аң. Тап аң өс өлөшкә бүленә. Һеҙ әле генә уның бер өлөшө - аҫҡы аңығыҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе көйләнегеҙ. Хәҙер аңлы өлөшкә күсәйек. Уның менән тиҙерәк бәйләнешкә инергә тәҡдим итәбеҙ. Күнекмәне эшләрҙән алда уны бер нисә тапҡыр уҡығыҙ һәм хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Кеше бейеклегендәге ҙур көҙгө алдында тороуығыҙҙы күҙаллағыҙ. Һеҙ унда үҙегеҙҙең тотош сағылышығыҙҙы күрәһегеҙ.
- Күргән күренеш һеҙгә оҡшамай. Был образда үткәндәрҙең барлыҡ етешһеҙлектәре һәм хаталары бар. Сағылышты һыҙып ташлағыҙ ҙа уйығыҙҙан ғына: "Мин һине ғәфү итәм", - тип ҡабатлағыҙ.
- Һеҙ уңға боролаһығыҙ, тулы әйләнеш яһайһығыҙ һәм ҡабат үҙегеҙҙең көҙгөләге сағылышығыҙ менән осрашаһығыҙ. Был юлы ул камил күренә. Уйығыҙҙа ғына: "Ғәфү ит мине", - тип ҡабатлағыҙ һәм "Мин һине яратам", - тип өҫтәп ҡуйығыҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асып, ысынбарлыҡҡа әйләнеп ҡайтығыҙ.

Юғары аңығыҙ менән бәйле һуңғы аҙым бик ябай, уның менән быға тиклем осраштығыҙ һәм нисек эшләнгәнен беләһегеҙ. Шуға ҡарамаҫтан, күрһәтмәләр менән яҡшылап танышығыҙ һәм иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм яратҡан тыныс картинаны күҙ алдына килтерегеҙ.
- Бүлмәгә кеше инә, уйығыҙҙа ғына уны үҙегеҙ итеп күҙаллағыҙ, әммә буйығыҙ бейегерәк һәм нурға сорналғанһығыҙ.
- Уйығыҙҙа ғына үҙегеҙҙең Юғары аңығыҙ менән күҙгә-күҙ ҡарашығыҙ һәм: "Зинһар, мине үткәндәрҙәге хаталар һәм уңышһыҙлыҡтар өсөн ғәфү ит", - тип әйтегеҙ. Бер аҙ паузанан һуң: "Әйҙә, бер-беребеҙҙе ғәфү итәйек", - тип өҫтәгеҙ.
- Юғары аңығыҙҙы ҡосаҡлағыҙ һәм: "Мин һине яратам", - тиегеҙ.
- Уйығыҙҙа ҡабат урындыҡҡа ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ.

Тормошоғоҙҙо байытыу юлына ошо аҙымды яһап, һеҙ күңел күтәренкелеге кисерерһегеҙ. Ул йәшәү энергияһы ағымының көсәйеүенә бәйле. Көтөгөҙ, тиҙҙән яҡшы көндәр килер.

**Роберт СТОУН.**



## 6 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Группа счастья", 5-я и 6-я серии. Сериал
22.30 "Любовь глазами мужчин"
23.30 Ночные новости
01.05, 03.05 "На самом дне океана". Мелодрама
03.00 Новости
03.15 "Добыча"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Родить вундеркинда". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 68-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 96-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 172-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
